*Асыулы йөҙлө булмағыҙ. Асыулы йөҙ менән бирәүгә лә күренмәгеҙ. Асыуланған ваҡытта һөйләшмәгеҙ, бигерәк тә башҡаларға яуап биреүҙән һаҡланығыҙ. Сөнки асыуланғанда яуап биреү асыуҙы көсәйтә. Асыуҙы баҫыу өсөн тәһәрәт алығыҙ, мөмкин булһа, намаҙ уҡығыҙ.*

**РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

2-8 МАЙ

(ҺАБАНАЙ)

2009 ЙЫЛ

№18 (332)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Эш булһа, йыр ҙа булыр,**

йәки Хеҙмәт романтикаһы нисек тыуа?



2

**Халыҡ араһында йөрөмәһәм...**

ниҙер етмәгән кеүек



5

**Ижад кешеләре өсөн мәңгелек һорау:**

“Әллә донъя көтөргә, әллә Бохар китергә...”



8-9

**Хат яҙышыуҙы онотоу...**

туған телдәге телмәрҙе лә оноттора түгелме?



12

**ТВ программа**

14





## *Ҡыҙ кеүек яҙ*

*Ер яҙылып киткәнгә лә,*
*Яҙ тигәндәр был мәлгә.*
*Алла ҡушҡас, быйыл да бит*
*Тейендек ҡуғуланға.*

*Яҙылған ер биттәренә*
*Нимә яҙһаҡ - шул булыр.*
*Һабанайҙа өлгөрмәһәк,*
*Һарысайҙа һуң булыр.*

*Үҫеп еткән ҡыҙ кеүек яҙ,*
*Килер батырын көтә.*
*Яҙ мөҙҙәте оҙаҡ түгел:*
*Апрель утһә, май етә.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Беҙҙең ил халҡына хас булған хеҙмәт романтикаһы ни өсөн юғала бара, тип уйлайһығыҙ?*

*Илнур КОТЛӘХМӘТОВ, Башҡорт дәүләт аграр университеты студенты, Баймаҡ йәштәре берлеге рәйесе:*

-"Хәҙерге йәштәр прагматиктар, бар эште лә аҡсаға ғына эшләй", тип әйтергә ашыҡмағыҙ. Бар беҙҙең арала идея өсөн генә йәшәүсе һәм эшләүсе йәштәр. Элек беҙҙең олатайҙар, ҡартатайҙар билен биштән быуып, колхоз төҙөгән, сиҙәм аҡтарған, йәғни үҙ заманы ҡушҡас, барыһын да бушҡа эшләгән. Әгәр ҙә беҙҙең быуынға ла ундай һынау килһә, шул уҡ хәл ҡабатланасаҡ. Шуға күрә хеҙмәт романтикаһы төшөнсәһенә мин шартлы рәүештә ҡарайым. Барыһы ла заманға бәйле, кешенең, халыҡтың асылы шул уҡ ул.

*Миңниса СӘФӘРҒӘЛИНА, журналист:*

-Илебеҙҙә икмәк, трудодень хаҡына эшләгән саҡта барлыҡҡа килгән ул романтика. Хәҙер илебеҙҙе ҡырағай капитализм яулай барған саҡта ниндәй романтикаға урын ҡалһын инде?! Романтиканың нигеҙендә тыуған иленә, халҡына мөхәббәт төшөнсәһе ята. Мин арыуыҡ ҡына ваҡыт Италияла эшләп ҡайттым. Барлыҡ уңайлыҡтары булған, ныҡ алға киткән ил булһа ла, унда ла юҡ был тойғо. Минеңсә, беҙгә илебеҙҙе үҫтерер, башҡалар араһында тиң булып йәшәр өсөн хеҙмәт романтикаһы кәрәктер. Иҡтисади күрсәткә еңеп сығыр өсөн дә кәрәк был тойғо.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

ИҒТИБАР: "КИСКЕ ӨФӨ" - БҮЛӘГЕМ"




# ЙӘ, КЕМДӘР АҠСАҺЫН...

Бөгөн иң күп гәзит уҡыусылар кемдәр, беләһегеҙме? Әлбиттә, һәр ваҡыттағыса, ауыл кешеләре. Айҙан-айға эш хаҡы алып эшләү бәхете лә бик аҙҙарына ғына тейә уларҙың, ә шулай ҙа гәзиткә яҙылыу мөмкинлеге табалар. "Бына, баҙарға сығарып ҡаймаҡ, эремсек һаттым да, гәзитегеҙгә яҙыла һалып, квитанцияһын һеҙгә ебәрәм", - тип яҙғайны Әлшәй районынан Сәбилә Латипова. Ауылдағы уҡыусыларыбыҙҙың күбеһе бына шулай рухи аҙыҡтан айырылмау яйын таба. Ҡала кешеләре кеүек, анды томалай, фекерләүҙе үлтерә торған телевизорға, компьютер уйындарына алыштырмаған әле улар гәзитте, китапты.

Нимә әйтергә теләйбеҙме? Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр. Әйҙәгеҙ, ҡушылығыҙ ошо "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына. Йә, кемдәр йәлләмәй 294 һум аҡсаһын? Йә, кем бер тапҡыр ғына бер кило колбаса, йә бер кило кәнфит ашамай тора ала? Акцияға ҡушылыуығыҙ тураһында беҙгә хәбәр итергә онотмағыҙ! Гәзитебеҙҙең индекстары -***50665, 50673*** .

## ҺӘМ ТАҒЫ...

**Шундай тәҡдим бар: кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә. Ғөмүмән, үҙебеҙҙе шатландыра, кәйефте күтәрә, бәхет нурына ҡойондора торған бәләкәй генә мөмкинлектәрҙе лә файҙаланырға, эҙләргә кәрәк, тибеҙ һеҙгә, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Бергә йәшәйек, бергә эҙләйек бәхетле итә торған сараларҙы.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

✓ *Ирекле һәм теләп башҡарылған эштәр, нисек кенә ауыр булмаһын, иманлы кешегә бөткөһеҙ рухи ҡәнәғәтләнеү, уңышлы һөҙөмтә һәм шатлыҡ алып килә.*



ИШАРА

# ЭШ БУЛҺА, ЙЫР ҘА БУЛЫР,

## йәки Хеҙмәт романтикаһы нисек тыуа?

**Уҙған быуаттың минең бала сағыма тура килгән 60-сы йылдарында радионан йыш яңғыраған йырҙарҙың береһе онотолмаҫлыҡ булып хәтергә һеңеп ҡалған: "Яландарҙа эшләп үҫкән егет, дандар алды иген ҡырында...". Эйе, совет осоронда хеҙмәткә, хеҙмәт кешеһенә дан йырланды. Һәм бында бер ниндәй ҙә яһалмалылыҡ юҡ ине: хеҙмәт романтикаһы ысынлап та ул замандағы халыҡ тормошоноң айырылғыһыҙ бер сифаты булып ҡабул ителә ине. Хәҙер ошо хаҡта һүҙ сыҡһа, ҡай берәүҙәр быны совет идеологияһының ул ваҡыттарҙағы бигүк еңелдән булмаған кеше тормошон биҙәп, матурлап күрһәтергә тырышыуы менән бәйләп аңлата. Ысынбарлыҡта нисек булды һуң? Ғөмүмән, тәбиғи хеҙмәттән ләззәт табып, дәрт-дарман алып, ҡанатланып йәшәү мөмкинме бөгөн?**

Уйлап ҡараһаң, ер йөҙөндә ниндәй генә хеҙмәт төрҙәре, ниндәй генә һөнәр эйәләре юҡ бөгөн. Моғайын, хеҙмәттең асылы кеше үҙ иткән, һөҙөмтәләре менән көн иткән ниндәй ҙә булһа айырым шөғөлдә түгелдер. Бер үк эште кемдер бик яратып башҡарһа, бәғзе берәүҙәрҙең ене һөймәүе лә бар. Башҡарған эшең күңелеңә яҡын булып, яҡты хис-тойғолар тыуҙыра икән, һине ошо эш менән бәйле ғәмәлдәр һис ялҡытмаясаҡ. Тик мәжбүри һәм ирекле ҡабул ителгән хеҙмәт араһындағы айырма ер менән күк араһылыр. Ҡол үҙенә тапшырылған бурыстарҙы нисек тиҙ һәм оҫталарса башҡармаһын, ниндәй генә гүзәл хеҙмәт емештәрен тыуҙырмаһын, ул үҙенең хеҙмәтенән ләззәтләнә алмаясаҡ, бындай хеҙмәткә дан да йырланмаясаҡ. Ҡол - үҙ-үҙенән, хеҙмәтенән һәм уның һөҙөмтәләренән ситләтелгән әҙәм, сөнки ул үҙ ғәмәлдәрен үҙе теләп башҡара ла, ошонан шатлыҡ та кисерә алмай. Кешенең үҙен хатта хеҙмәт ҡоло итеп ҡарауы ла аяныслы, сөнки бындай хеҙмәт кешенең барлыҡ ижади булмышын юҡҡа сығарып, ирекле шәхес булыу бәхетенән мәхрүм итә. Ғөмүмән, хеҙмәт даирәһендә мәжбүрилек (ә был ҡоллоҡтоң бер сифаты) ни тиклем аҙыраҡ булһа, кеше лә шул тиклем ижади юғарылыҡҡа күтәрелә ала. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Рәсәйҙә күп быуаттар дауамында ғәҙәти йәмғиәт күренешенә әйләнгән ҡоллоҡ психологияһының (ә уның заманға яраҡлаштырылған формалары бөгөн дә бер ҡайҙа ла юғалмаған) эҙемтәләре әлегә тиклем хеҙмәтте уның бөтә ижади ысынбарлығында танып белергә һәм уны илаһи эшмәкәрлек кимәленә күтәрергә мөмкинлек бирмәй.



Әҙәм затының ғүмере буйы эшләп йәшәргә мәжбүр булыуын Хоҙай тарафынан кеше иңенә һалынған ауыр бурыс, тип ҡараусылар ҙа бар. Шул уҡ христиан дине тотоусылар кешенең хеҙмәткә дусар булыуын Хоҙай язаһы сифатында ҡабул итә. Аллаһ һүҙен тотмаған Әҙәмгә: "Бынан ары ейер ризығыңды тир түгеп табасаҡһың", - тиелә. Тәү гонаһ шомлоғо ятып, яза рәүешендә ҡабул ителгән эш-хеҙмәт бер саҡта ла ләззәт сығанағы була алмаясаҡ. Шулай булғас, христиандар үҙҙәренең хеҙмәти ғәмәлдәрен бер нисек тә изгеләштерә алмай. Ә Исламда, киреһенсә, әҙәм затының тир түгеп хәләл мал табыу ғәмәлдәренең Аллаһ тарафынан хупланып, ундай эштәрҙең сауаплы булыуы раҫлана. Тап шуның өсөн мосолман кешеһе ниәт иткән хеҙмәти ғәмәлдәрен бисмилла әйтеп башлай ҙа, Аллаһҡа шөкөр ҡылып тамамлай. Ирекле һәм теләп башҡарылған эштәр, нисек кенә ауыр булмаһын, иманлы кешегә бөткөһеҙ рухи ҡәнәғәтләнеү, уңышлы һөҙөмтә һәм шатлыҡ алып килә.

Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ хәҙистәренең береһендә тап ошо турала һүҙ бара. Бер ваҡыт Мөхәммәт бәйғәмбәргә һәм уның менән бергә булған сәхәбәләренә бер бик бәһлеүән кәүҙәле кеше осрай. Сәхәбәләр бәйғәмбәргә: "Ошо әҙәм дә Аллаһ юлына сыҡһа, ҡалай һәйбәт булыр ине", - ти. Мөхәммәт ғәләйһиссәләм уларға былай тип яуаплай: "Әгәр ошо инсан үҙ балаларына ризыҡ табыуҙы ниәтләп йөрөһә, уны Аллаһ юлында, тип әйтеп була. Әгәр ул ҡарт ата-әсәһен ҡайғыртып, уларға ярҙам итергә китеп бара икән, тимәк, ул Аллаһ юлына баҫҡан. Хатта ул үҙе өсөн хәләл икмәк табыу тураһында уйлаһа ла, барыбер Аллаһ юлынан тайпылмаған. Әммә ошо әҙәм ни менәндер маҡтаныу тураһында уйлап йөрөй икән, ул иблес, шайтан юлына баҫҡан булыр". Тимәк, мосолман кешеһенә буш һүҙ һөйләп йөрөү урынына күп сауаплы хеҙмәт юлын һайлау мең тапҡыр файҙалыраҡтыр.

Дини ҡарыһүҙҙәрҙә Хоҙайҙың Әҙәмде үҙенә оҡшатып бар иткәне тураһында әйтелә. Хаҡтыр был, юғиһә, Аллаһ үҙенең барлыҡ фәрештәләренә Әҙәм алдында баш эйеү бурысын йөкмәтмәҫ ине. Әммә бында һүҙ тән оҡшашлығы тураһында бармай (Хоҙайҙың тышҡы ҡиәфәтен бер кем һәм бер ҡасан да белә алмаясаҡ), ә рухи уртаҡлыҡ күҙ уңында тотола. Аллаһы Тәғәлә - бөйөк ижадсы, бар нәмәне бар итеүсе, бөтә Йыһанды үҙ ҡанундарына ярашлы тотоп тороусы илаһи зат. Әгәр кешегә булмағанды булдырыу, уйлап табыу, төҙөү, ижад итеү ҡеүәһе һалынмаһа, беҙ бөгөн белгән кешелек тә булмаҫ ине. Ә ижадтың тәү сығанағы - хеҙмәт, хатта фән кимәленә күтәрелгән ижад та шул уҡ хеҙмәттең абстракт фекерләү кимәлендә башҡарылғаны ғына ул. Хеҙмәттең ижади асылы аша ғына уның илаһилығын, уға ғына хас рухи ҡиммәттәр сағылышын төптәнерәк аңларға була.

Беҙҙең аңыбыҙға бала саҡтан уҡ "Кешене хеҙмәт кеше иткән" тигән фекерҙе һеңдереп килделәр. Юҡ, өгөт-нәсихәттә генә түгел, тирә-яғыбыҙҙа хеҙмәт кешеләренә булған хөрмәтте ысынбарлығында күреп-тойоп үҫтек беҙ. Үкенескә күрә, ул ваҡыттарҙы хәҙер һағынып иҫкә алырға ғына ҡалып бара. Күп маллы фермаларҙа һауынсыларҙың киске һауынға килеүен көтөп мөнрәшкән һыйырҙар, ҡурағаиркенгә сығарылғас, уйнаҡлап, сабышып йөрөгән быҙауҙар, киске шәфәҡтә ауыл көтөүен ҡаршы алырға сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ, бала-саға тауыштары... Яҙғы сәсеү йәиһә ураҡ мәлдәрендә көсөргәнешле, әммә һәр саҡта ла шатлыҡ-ҡыуаныс ҡатыш эш ритмынан, трактор һәм комбайндар гөрөлдәүенән тыуған хеҙмәт симфонияһы... Ауылдағы яңы тормош моңон йөрәге аша үткәрә алып, үҙенә генә хас лирик таланты менән дан алған шағирыбыҙ Ғәлимов Сәләм күңелендә ошондай юлдар юҡҡа ғына тыумағандыр:

"Һабансылар йыры, тракторҙар
Гөрөлдәүе, - баҫыу өҫтөндә.
Мең томдарҙа бөтмәҫ роман тыуа,
Ноталарға һыймаҫ тауыштар,
Буяу төрө етмәҫ картиналар..."

Хеҙмәт энтузиазмының романтик хис-кисерештәр тыуҙыра алыуының үҙ сере барҙыр. Башҡорттар - боронғо тәбиғәт балалары, ә тәбиғәт һәм тәбиғилек кеше күңелендә хисләнеү, йәғни тормошто романтик тойғолар солғанышында күрә алыу халәтен тиҙ булдыра. Йәнә башҡорттарҙың күп быуаттар буйына ирекле тормошта йәшәп, көнитмештәрендә күп эштәрен тотош нәҫел-ырыу менән башҡарыу йолаһы өҫтөнлөк иткәнен онотorға ярамай. Башҡорт өмәһендәге берҙәмлек, ҡан-ҡәрҙәшлек, ярҙамсыллыҡ һәр осраҡта ла күңел асыу, йор һүҙ, әйтеш-йыр менән ҡуша килеп, кү-мәкләшеп эшләүҙең эмоциональ йоғонтологон уғата көсәйтеп ебәрә алған. Хәҙер һәр кем үҙе нисек теләй, шунса көн күргән заманда ла халҡыбыҙға яңғыҙаҡлыҡ, берәҙәклек сифаттары хас булмауын онотмаҫҡа ине. "Күмәкләгән - яу ҡайтарған" тигәндәй, хәҙер ҙә, киләсәктә лә тарихи көрсөктәрҙе, тормош ауырлыҡтарын үтеп сығыу ысулдарын тик берҙәм һәм ижади хеҙмәт юлында ғына табасаҡбыҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов "Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенең йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсы, "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсы һәм уның сиктәрендә үткәрелгән "Рус теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" һәм "Татар теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурстары лауреаттарына Башҡортостан Республикаһы Президенты премияларын биреү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.

✓26-29 майҙа Өфөлә Рәсәй нефть һәм газ сәнәғәтселәренең VIII конгресы һәм "Газ. Нефть.Технологиялар-2009" халыҡ-ара махсус күргәҙмәһе үтәсәк. Әле был сараларҙа ҡатнашыу тураһында 260-лап предприятие белдергән дә инде.

✓БР Хөкүмәте бойороғо менән 27 апрелдән 27 майға тиклем Башҡортостандың ҡала һәм райондарында республика юлдарын төҙөкләндереү, уларҙың санитария-техник торошон яҡшыртыу, тәртипкә килтереү буйынса айлыҡ уҙғарыла.

✓Октябрьский ҡалаһында 29-30 майҙа ҡурай байрамы үткәреләсәк. Ҡурай байрамында ҡатнашыу өсөн ғаризаларҙы 450072, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 72 адресы буйынса Республика халыҡ ижады үҙәгенә ебәрергә була. Телефондар: (347) 272-53-25, 272-72-24.

✓Республиканың халыҡты эш менән тәьмин итеү хеҙмәте эшһеҙлектең уртаса оҙайлығы кәмеүе тураһында хәбәр итә. Быйыл тәүге кварталда ул уртаса 3,4 ай тәшкил иткән. Ә былтыр ул 4,7 ай булған. Әлбиттә, төрлө социаль төркөмгә төрлө күрһәткес хас. Йәштәр өсөн эшһеҙлек 3,8 айға, инвалидтар өсөн 4,1 айға һуҙылыуы мөмкин. Хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнешлек мәлендә эшһеҙлектең тотороҡлолоҡ (дүрт айҙан бер йылға тиклем) һәм хроник (бер йылдан ашыу) күренеше ҡыҫҡарыуы бик мөһим.

✓Был арала Салауат, Архангель райондарында һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһында хакимиәт башлыҡтары алыштырылды. Салауат районында район хакимиәте башлығы бурыстарын ваҡытлыса башҡарыу Ғәле Хәйретдиновҡа, Архангель районында -Хәйҙәр Мәүлекәсовҡа , Ә Стәрлетамаҡ ҡалаһында Вәхит Әбдрәхимовҡа йөкмәтелде.

*✓ Мәскәүҙең бер генә милиционерының ҡылығы тотош эске эштәр органдарын ҡараға буяны тиеүселәр бар бөгөн. Шулаймы икән? Бәлки, Евсюковтың енәйәте хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәтендәге күп кенә проблемаларҙы асып һалғандыр?*



АҘНА ШАҢДАУЫ

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ - ЕВСЮКОВ!

## Милициянан кем ҡурҡырға тейеш - енәйәтсеме, әллә тотош йәмғиәтме?

**Ах! Ох! Ой-ой-ой! Ҡот осҡос! Ни эшләргә? Ҡайҙа ҡасырға? Ҡайҙа боҫорға? Мәскәү буйлап ҡораллы иҫеректәр (әллә иҫерек ҡораллылармы шул?) йөрөй. Уңлы-һуллы ата. Кемде йәрәхәтләй, кемде үлтерә. Юлына осрап ҡуйма, йәнеңде ҡыйыр. Ҡаршы сыҡма, атып үлтерер. Машинаға ултыртма, аҡса урынына - йөрәгеңә туғыҙ грамм ҡурғаш. Был тағы ла нимә хаҡында тиһегеҙме? Бөтәгеҙ ҙә аҙна башында баш ҡалабыҙ Мәскәүҙә булған был ҡанлы ваҡиға хаҡында ишеткәндер. Ишетмәй ни, көнө-төнө шул хаҡта ғына һөйләйҙәр бит. Дүшәмбе көнө 27 апрель илебеҙҙең баш ҡалаһында "Царицыно" эске эштәр бүлеге начальнигы милиция майоры Денис Евсюков ҡан ҡойош ойоштора. Тәүҙә ул шәхси таксистың машинаһына ултыра һәм водителде атып үлтерә. Шунан уның юлына йәш егет менән ҡыҙ осрай. Милиционер уларҙы ла буш ҡалдырмай. Ҡыҙыҡай ауыр йәрәхәт ала, ә икенсе пуля егеттең яурынына эләгә. Эш быының менән генә тамамланмай әле. Иҫерек майор Шиповская урамында урынлашҡан "Утрау" супермаркетына килеп инә. Бында ул кассир ҡыҙыҡайҙы һәм бер һатып алыусыны үлтерә, ете кешене яралай. Шуларҙың дүртәүһе ауыр хәлдә.**

Аптырата алманың, тиеүселәр табылыр. Башҡа илдәрҙә ундай ваҡиғалар айына кәмендә бер тапҡыр булып ҡына тора, тимәксегеҙме? Ысынлап та. Күптән түгел, мәҫәлән, Норвегияла 9 йәшлек (!) бер малай мәктәпкә мылтыҡ тотоп килгән һәм ут асҡан. Бәхеткә ҡаршы, берәүгә лә эләкмәгән. Батыр уҡытыусы сабыйҙың ҡулынан ҡоралды тартып алған.

11 мартта Германияла Винненден ҡалаһында 17 йәшлек Тим Кречмер үҙенең мәктәбендә өс уҡытыусының, туғыҙ уҡыусының башына етә. Бынан тыш, ул психиатрия клиникаһының табибын һәм ике осраҡлы үтеп барыусыны атып үлтерә. Артабан ул полиция менән атыша башлай. Йәмғеһе Тим Кречмер 16 кешене үлтерә.

2008 йылдың сентябрендә Финляндияның Каухайоки ҡалаһында урынлашҡан иҡтисад колледжының 22 йәшлек студенты Матти Юхани Саари үҙенең уҡыу йортонда ут аса һәм туғыҙ кешене үлтерә.

2007 йылдың ноябрендә Финляндияла 18 йәшлек Пекки-Эрик Аувинен лицейҙа 8 кешене һәләк итә. Ғөмүмән, бындай фажиғәләр Америка Ҡушма Штаттарында, ҡорал ирекле рәүештә һатылған башҡа илдәрҙә, аҙым һайын. Улар быға күнегеп тә бөткән. Шуға ла потенциаль енәйәтсенең күҙенә сағылмаҫ өсөн урамға сағыу кейемдәрҙә сыҡмаҫҡа, йәмәғәт урындарында ҡысҡырып һөйләшмәҫкә тырышалар. Улар беләләр, бында ҡорал ирекле һатыла. Бында һәр бер кешенең кеҫәһендә берәй пистолет, машинаһында карабин ятыуы, ә башында берәй "тараҡан йүгереп йөрөүе" ихтимал. Әммә беҙҙә түгел. Беҙҙә бит ҡоралға хоҡуҡ һаҡлау органдары һәм Ҡораллы көстәр генә эйә. Береһе енәйәтселәрҙән, икенсеһе тышҡы дошмандарҙан һаҡларға тейеш. Эйе, эйе, аңлайым. Бик теләһәң, ҡоралды беҙҙә лә табырға мөмкин. Ҡыйын түгел, һатҡан урындары ла бар, һатып алыусылар ҙа юҡ түгел. Әммә был енәйәт һанала. Тотолған осраҡта ҡорал һатыусы ла, уны һатып алыусы ла ҡаты яҙаға тарттырыласаҡ.

Әйҙәгеҙ, бер генә минутҡа беҙгә, ябай кешеләргә, пистолет көбәген тоҫҡаусы потенциаль енәйәтсене күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Илдәге социаль-иҡтисади ситуацияны күҙ уңында тотоп, әлбиттә. Минеңсә, беренсе урында эшҡыуар торорға тейеш. Эреме ул, әллә ваҡтөйәкме, уныһы үтә мөһим түгел. Илдә көрсөк. Банкылар бизнесты үҫтереүгә, һис юғында һаҡлап алып ҡалырға мөмкинлек (йәғни кредит) бирмәй. Халыҡта аҡса юҡ. Эшлекле бәйләнештәр өҙөлгән. Бурыстар (аренда, транспорт сығымдары, электр энергияһы һәм башҡалар) көндән- көн арта ғына бара. Ни эшләргә? Кемдер үҙ-үҙенә ҡул һала. Ә кемдер ҡулына ҡорал тотоп, урамға сыға. Кемдән булһа ла үс алыр өсөн.

Икенсе урынға - эшһеҙ ҡалған күп балалы ата кеше. Ул да ҡорал тотоп урамға сығыуы ихтимал. Балаларының тамағын туйҙырыр өсөн теләһә ниндәй юл менән аҡса табыу теләге ҡыуыр ине уны урамға.

Сит илдәрҙә, ана, уҡыусылар имтихан алдынан (йәки һуңынан) ҡорал алып мәктәпкә килә. Йәғни улар ҡорал ярҙамында ниндәйҙер проблемаларын хәл итергә маташа.

Тағы ла кем ҡулына ҡорал алыр ине? Ҡапыл ғына әйтеп тә булмай. Һәр хәлдә, ябай кеше түгел. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, милиция майоры Евсюков ябай кеше түгел дә ул. Уның бизнесы юҡҡа сыҡмаған. Өйөндә ас балалар икмәк һорап илап ултырмай. Ул туҡ. Эше, биләгән вазифаһы бар. Ул үҙе лә туҡ, уның бисәһе лә, ҡәйнәһе лә, дуҫ-иштәре лә, хеҙмәттәштәре лә туҡ. Улар әле генә Евсюковтың тыуған көнөн билдәләп, кафеламы, ресторандамы шунда, күңел асҡандар. Тимәк, милиция майорының тыуған көнөн Мәскәү ресторанында ҡаршыларлыҡ мөмкинлеге бар. Егерме-егерме бишләп кеше булған тиҙәр ул кистә майорҙың байрамында ҡунаҡта. Өфө хаҡтары менән генә иҫәпләгәндә лә 25-35 мең һум килеп сыға түгелме? Ә Мәскәү хаҡтары менән? Милиционер, хатта ул майор һәм эске эштәр бүлеге начальнигы булһа ла, бер кис ултырыу өсөн 50-60 мең һумды тотона ала микән?

Уның ҡала урамдарына сығып китеп, ҡан ҡойоуы хәләл ефете менән талашып китеүе менән бәйле, тигән фараз да бар. Аңлайым. Була торған хәл. Һуң, проблемаларҙы пистолет ярҙамында хәл итеп өйрәнгән майорға ниңә үҙ бисәһен атып үлтермәҫкә? Ғәҙел яҙаһын алыр ҙа ун биш йылдан ireккә сығып, яңы тормош башлап ебәрер ине. Бер танышы, хәләл ефете менән айырыуса ныҡ ыҙғышһа, "баштан уҡ үлтерһәм, күптән ултырып сығыр инем", тип ысҡындырған, имеш. Минеңсә, хатта судьялар ҙа (әгәр ир-егет затынан булһалар) уның был ҡылығын аңлап ҡабул итер ине.

Фажиғәгә ҡорбандар күҙлегенән ҡарайыҡ (йәндәре йәннәттә булһын бахырҙарҙың). Улар хаҡында әлегә берәү ҙә бер һүҙ ҙә әйтмәй бит. Мәскәү ҡалаһы эске эштәр идаралығының элекке етәксеһе (уны шишәмбе кис Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев отставкаға оҙатты) Владимир Пронин уларҙың туғандарының ҡайғыларын да уртаҡлашманы, исмаһам. Үҙенең хеҙмәткәрен яҡлауҙан башҡа бер нәмәгә лә эшкинмәне. Евсюковтың ымына буйһоноп килеп туҡтаған ир-егет Мәскәү урамдарына үҙ машинаһында туйып ҡотороңғандан мажаралар артынан сыҡҡанмы икән? Ай-һай! Уны ла урамға төнгө сәғәт ун икелә аҙмы-күпме аҡса эшләү маҡсаты (йәғни әлеге лә баяғы көрсөк еле) ҡыуып сығарғаны аңлашыла бит. Ә магазинға аҙыҡ-түлек артынан сыҡҡандарҙың ғәйебе ниҙә? Ә уларҙың ғаиләләренең, һөйгән кешеләренең хәлен күҙ алдына килтерә алаһығыҙмы?

Ә майор туҡ. Ул төшөрөп алған. Ул төнгө Мәскәү буйлап ғәйеплеләрҙе эҙләй. Милицияның эше шул бит. Ә ғәйеплеләр (хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәре фекеренсә) аҙым һайын. Таксист милиционерға ҡайһы ере менән оҡшамаған икән? Ҡырын ҡараған микән? Әллә уйламайыраҡ һүҙ ысҡындырғанмы? Магазиндағыларҙа Евсюков ниндәй ғәйеп тапҡан икән?

Мәскәү милиционерының ҡылыҡтары араһында иң мөһиме һәм психологик йәһәттән иң ҡыҙыҡлыһы - уның граждан кейеме, йәғни костюмы өҫтөнә милиция кителен ябынып алыуылыр. Форма - ул кешенең теге йәки был хеҙмәттә булыуына ишара бит. Ә Евсюков өсөн ул үҙенә күрә бер ҡалҡан (заманса әйткәндә, бронежилет) сифатында. Башҡаларҙан айырым бер статус биреүсе атрибут, символ. Мин һеҙ түгел, мин башҡа, мин һеҙҙән юғары. Күпкә юғары. Һеҙ - көтөү. Һарыҡ көтөүе. Ә мин - көтөүсе. Теләһәм - яҡлайым. Теләһәм - аҡлайым. Теләһәм- атып үлтерәм. Һеҙ минең ҡулда. Һеҙ минең ихтыярҙа. Бына Евсюковтың башындағы уйҙар. Эш бит бисәлә түгел. Дөрөҫөрәге, бисәлә генә түгел.

Ғөмүмән, Евсюковтың енәйәтен уның психологик хәленә генә ҡайтарып ҡалдырыу, бисәһе менән булған конфликт эҙемтәһе тип һанау - эске эштәр органдарында килеп тыуған проблеманы йоморға маташыу ул. Мәскәүҙең бер генә милиционерының ҡылығы тотош эске эштәр органдарын ҡараға буяны тиеүселәр бар бөгөн. Шулаймы икән? Бәлки, Евсюковтың енәйәте хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәтендәге күп кенә проблемаларҙы асып һалғандыр? Милицияла хөкөм һөргән законһыҙлыҡ, баш-баштаҡлыҡ хаҡында һөйләй түгелме был хәл? Бәлки, шул проблемаларҙы хәл итә торған ваҡыт еткәндер? Беҙҙең илдә бит эске эштәр органдары бер ҡасан да халыҡты яҡлаусы, йәмғиәтте енәйәттән ҡурсалаусы, ә иң мөһиме, енәйәттәрҙе булдырмау өҫтөндә эшләгән структура булманы. Ул - 1917 йылдан алып яҙа ҡылыусы, һәр бер кешелә потенциаль енәйәтсе күреүсе орган булды һәм әле лә шул ролде уйнай. Мәскәү милицияһын ғына алайыҡ. Һуңғы ун йыл эсендә генә баш ҡалабыҙҙа сәйәсмәндәрҙе, журналистарҙы, эшҡыуарҙарҙы, хатта дәүләт эшмәкәрҙәрен заказ буйынса үлтерҙеләр, торлаҡ йорттарҙы шартлаттылар, мәҙәниәт һарайҙарын баҫып алдылар. Ғәйеплеләр табылдымы?

**Эске эштәр органдарына кадрҙар һайлап алыу процедураһын ҡәтғиләштерергә кәрәк, тиҙәр хәҙер. Алғанда матур, мөләйем, аҡыллы һәм тыйнаҡ ҡына бер ҡыҙ ине, был шапшаҡ, һәпрә, тинтәк бисә ҡайҙан килеп сыҡҡан икән, тип аптыраныусы ир сифатындабыҙ беҙ. Милицияға эшкә, бәлки, ысынлап та, саф күңелле, намыҫлы йәш кешеләр киләләр. Тик тиҫтәләгән йыл буйына булдырылған система бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һала. Уны нисек еңергә? Емерергәме? Әллә реформаларғамы? Түрәне отставкаға оҙатыу менән генә милицияла эштәр яҡшырып китер микән?**

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 майҙан 3 майға тиклем Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжында (Өфө ҡалаһы, Беренсе май урамы, 20) "XXI быуат лидеры"Лидерҙар һәм балалар һәм йәштәр йәмәғәт ойошмалары етәкселәренең республика конкурсы финалы үтәсәк. Унда Башҡортостандың 25 районы һәм ҡалаһынан 80 лидер ҡатнашасаҡ. Конкурс программаһында конкурсанттарҙың ойоштороу, ижади, коммуникатив, идара итеү һәләтлектәрен асыусы саралар ҡаралған.

✓Бөйөк Еңеү көнөндә баш ҡаланың Совет майҙанында баш ҡала округы хакимиәте һәм "Молодежная газета" редакцияһы призларына еңел атлетика эстафетаһы үтәсәк. Шуның менән бәйле иртәнге 10-дан 15 сәғәткә тиклем Совет, З. Вәлиди, Аксаков, Пушкин урамдарында транспорт хәрәкәте туҡтатылып торасаҡ.

✓"Вся Уфа" телекомпанияһы Бөтә Рәсәй "Тэфи-регион" телевизион конкурсында еңеү яуланы. Коллектив "Интервью" номинацияһында бронза Орфей һынына лайыҡ булды. Телекомпания директоры Гүзәл Ибраһимованың билдәле журналист Владимир Познер менән әңгәмәһе был жанрҙағы иң яҡшы эш тип табылды. Быйыл "Тэфи-регион" премияһына Рәсәйҙең 64 төбәгенең 126 компанияһынан 370 эш тәҡдим ителгән. Конкурстың жюри составына Владимир Познер, Кирилл Набутов, Сергей Майоров кеүек телевизион оҫталыҡтың иң юғары үрендәге кешеләр ингән һәм улар "Вся Уфа" телекомпанияһын юғары профессиональ коллектив тип баһалаған.

Өфөлә 85 кешегә А гепатиты менән сирләүе тураһында диагноз ҡуйылған. Улар араһында 17 йәшкә тиклемге 11 бала ла бар. Ауырыуҙың таралып китеүен иҫкәртеү маҡсатында баш ҡалала көндәлек мониторинг эшләй башланы. Дөйөм туҡланыу ризыҡтарын асыҡлау маҡсатында сирлеләрҙән мәғлүмәт алына. Баш ҡаланы эсәр һыу менән тәьмин итеүсе ойошмаларҙа профилактик тикшереүҙәр үткәрелә. "Өфөканал" муниципаль унитар ойошмаһында үткәрелгән тикшереүҙәр һыуҙа А гепатиты вирусы юҡлығын раҫланы.

**✓Төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһы "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге 9 майҙа 12 сәғәттә сираттағы киңәйтелгән идара ултырышын Ишембай районы Торатау тауында үткәрә.**

✓ **Беҙҙең хоккейсы Алексей Морозов өсөнсө гол индереп, рәсәйҙәрҙе алға сығарҙы. Ә уйын бөттө тигәндә юлаевсы Александр Пережогин дүртенсе, еңеүле шайбаны майҙан хужалары ҡапҡаһына йүнәлтте.**



*ЕТЕ РАЙОН*

**КИРОВ РАЙОНЫ**нда Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында "Бәләкәй йондоҙсоҡтар - 2009" фестивале үтте. Быйыл унынсы тапҡыр уҙғарылған был сарала 3-7 йәштәге 150 бала ҡатнашты. Күркәм традицияға әүерелгән тамаша йылдан-йыл киң таныулы ала бара, унда 500-гә яҡын мәктәпкәсә йәштәге бала үҙенең һөнәрен күрһәтеп өлгөргән дә инде.

**СОВЕТ РАЙОНЫ**ның 107-се лицейында эшләп килгән "Буратино" студияһы ун йыллыҡ юбилейын билдәләй. Был студияла мәктәпкә уҡырға барырға йыйыныусы уҡыусылар тәжрибәле педагогтар, психологтар менән шөғөлләнә, уҡырға, яҙырға, сит телдәргә өйрәнә. Дәрестәр эңгәмә, уйын рәүешендә үтә. Бында шөғөлләнгән буласаҡ "беренсеәләр" 1 сентябрҙе түҙемһеҙлек менән көтөп ала.

**КАЛИНИН РАЙОНЫ**нда балалар музыка мәктәптәре һәм дөйөм белем биреү учреждениеларының башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнаусылары араһында II асыҡ район фестивале үтте. Фестиваль Салауат Юлаевтың тыуыуына 255 йыл тулыуға арналғайны. Унда ҡатнашыусыларҙың йәше, улар башҡарған музыкаль номерҙар, музыка ҡоралдары, әҙерлек кимәле төрлө-төрлө булһа ла, уларҙың барыһын да халыҡ мәҙәниәтенә, тарихына оло һөйөү берләштерҙе.

**ОРДЖОНИКИДЗЕ РАЙОНЫ**ның 253-сө балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре тиҫтерҙәренә Ганс-Христиан Андерсен әкиәттәре буйынса "Әкиәттәр йәрминкәһе" тип аталған театрлаштырылған тамаша күрһәтте. Был балалар баҡсаһының өҫтөнлөклө йүнәлеше булып театраль эшмәкәрлек тора. Тәрбиәселәр фекеренсә, әкиәттәр балаларға әхлаҡи, рухи тәрбиә биреп кенә ҡалмай, улар ярҙамында сабый донъяны аҡыл менән генә түгел, ә йөрәк аша ҡабул итергә өйрәнә, төрлө яҡлап үҫешә.

**ДИМ РАЙОНЫ**нда "Батыр" физкультура-һауыҡтырыу комплексында дөйөм ҡала көрәш фестивале сиктәрендә билбау көрәше буйынса ярыш үтте. Бында бөтәһе 6 команда ҡатнашты. Баш ҡаланың Совет районы командаһы - беренсе, димдәр икенсе урын яуланы. Өсөнсө урынға Киров районы сыҡты.

**ОКТЯБРЬ РАЙОНЫ** хакимиәтендә, йола буйынса, 50 һәм 60 йыл бергә йәшәгән ғаилә парҙарын тәбрикләнеләр.

Ингә-иң тереп, татыу ғүмер кисергән 30 ғаиләгә Башҡортостан Республикаһы Президентының ҡотлау адресы һәм бүләктәр тапшырылды, уларҙы билдәле артистар ҙа ҡотланы.

**ЛЕНИН РАЙОНЫ**ның Галле округы урамы эргәһендәге Ағиҙел йылғаһы аша күперҙә 20 майҙан алып 20 сентябргә тиклем ремонт эштәре башҡарыласаҡ. Был осор эсендә күперҙең машина йөрөй торған юлында автотранспорт хәрәкәте өлөшләтә ябыласаҡ, күпер аша сыҡҡанда тиҙлек сәғәтенә 30 километрҙан артмаҫҡа тейеш. Ремонт ваҡытында күперҙән еңел һәм маршрут-пассажир автотранспорты ғына үтә аласаҡ, йөк машиналары хәрәкәте өсөн М-5 һәм М-7 Федераль автомобиль юлы ҡаралған.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ҠАТЫН-ҠЫҘ - КҮБЕРӘК

**Киләһе йыл буласаҡ Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу Башҡортостанда йәшәүселәрҙең енес һәм йәш составы буйынса ниндәй үҙгәрештәр кисереүен күрһәтәсәк.**

2002 йылғы һуңғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренән күренеүенсә, республикабыҙҙа 2181,1 мең ҡатын-ҡыҙ һәм 1923,2 мең ир-егет йәшәй. 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса ҡатын-ҡыҙҙар - 2 091 692, ир-егеттәр 1 851 421 кеше тәшкил итһә, 1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыу шуға ярашлы 2 068 082 һәм 1 776 198 кеше булыуын асыҡлағайны.

Башҡортостанстат хәбәр итеүенсә, 2002 йыл менән сағыштырғанда, әлеге ваҡытта Башҡортостанда халыҡ һаны 50 мең самаһы кешегә кәмегән, шул уҡ ваҡытта ир-егеттәр һанының ҡатын-ҡыҙҙар иҫәбенә ҡарағанда байтаҡҡа тиҙерәк кәмеүе күҙәтелә. 2008 йылдың 1 ғинуарына улар төбәктә шуға ярашлы 1889,9 мең һәм 2162,8 мең тәшкил иткән.

Халыҡтың ике яртыһының һан составы яғынан айырымланыуы айырыуса ҡалаларҙа ныҡ күҙәтелә. 2002 йылда ҡалала йәшәгән 1 мең ир-егеткә 1167 ҡатын-ҡыҙ тура килгән.

1897 йылғы халыҡ иҫәбен алыу Өфө губернаһында ир-егеттәрҙең күберәк булыуын күрһәтә: мең ир-егеткә 994 ҡатын-ҡыҙ тура килгән. Ауыл халҡы араһында бынан етее йыл элек мең ир-егеткә 1078 ҡатын-ҡыҙ тура килһә, әле - 1084.

Енестәр нисбәте йәш яғынан да төрлөсә күренә. Яңы тыуған һәр мең сабыйҙың 510-515-е самаһы малайҙар булһа, 485-490-ы ҡыҙҙар.

Ғаилә мөнәсәбәттәре. 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу күрһәтеүенсә, 16 йәштәге һәм унан өлкән һәр дүртенсе ир-егет бер тапҡыр ҙа никахта тормаһа, шул уҡ йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың 18 проценты ғына бер ҡасан да никахта булмаған. Һуңғы халыҡ иҫәбен алыу ваҡытына һәр мең енес иҫәбенә 654 ир-егет һәм 555 ҡатын-ҡыҙ ғаиләле булған.

## СУСҠА КИҘЕҮЕ БЕҘГӘ ЯНАЙМЫ?

**Эпидемиологтар республика халҡын сит илдәргә сығыуҙан тыйылып торорға саҡыра. Был ҡайһы бер илдәрҙә "Калифорния" киҙеүе, икенсе төрлө әйткәндә "сусҡа киҙеүе" таралыуы менән менән бәйле.**

БР буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһенең урынбаҫары Нәсимә Кусимова хәбәр итеүенсә, был сара республикала инфекция таралыуға юл ҡуймау өсөн иң ышаныслы ысул. Башҡортостандың был киҙеүгә бирешеүсе илдәр менән туранан-тура бәйләнеше юҡ, шулай ҙа әлеге ваҡытта тап ошо илдәрҙә ял итергә һәм командировкаға сығыусылар булыуы ихтимал. Төбәк территорияһына инфекция үтеп инмәһен өсөн бөгөнгә көндә бар нәмә лә эшләнә. Мәҫәлән, Халыҡ-ара "Өфө" аэропортына килеп төшкән пассажирҙарҙың барыһы ла дистанцион термометрия процедураһын үтә.

**"Башинформ" агентлығынан.**

*ХОККЕЙ*




**Беҙҙең команда хоккей буйынса быйылғы донъя беренселеген ғәмәлдәге чемпион рангыһында башланы һәм үҙенең ысын чемпион икәнен тәүге өс уйында ла дәғүәселәрҙе ҙур иҫәп менән ҡыйратып, ышандырырлыҡ итеп иҫбат итте.**

Рәсәй йыйылма командаһы донъя чемпионатының старт матчында Германия уйынсыларына нисек хоккей уйнарға кәрәклеген күрһәтте. Тәүҙә Олег Сапрыкин, юлаевсы Александр Радулов пасын оҫта файҙаланып, беренсе шайбаны немецтар ҡапҡаһына сәпәне. Күп тә үтмәне, Илья Ковальчук икенсе голдың авторы булды. Ул Германия ҡапҡасыһына бергә-бер сығып, оҫта алданы. Сергей Зиновьев беренсе осор аҙағында уҡ Рәсәй командаһының өҫтөнлөгөн 3:0 иҫәбенә тиклем еткерҙе. Ә өсөнсө осорҙа Антон Курьянов, Данис Зарипов иҫәпте 5:0 еткерҙе. Көйәрмәндәрҙән береү: "Бына шулай уйнайҙар ул хоккейҙы!", - тип ҡысҡырып ебәрмәһенме! Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ!

Рәсәй хоккейсылары Францияның йыйылма командаһы менән уйнағанда ла еңеүле маршты дауам итте. Уйын башланып, ике минут та үтмәне, юлаевсы Александр Радулов французлар ҡапҡаһына беренсе шайбаны сәпәне. Тағы бер аҙҙан Илья Ковальчук икенсе шайбаны Франция командаһы ҡапҡаһына йүнәлтте. Өсөнсө шайбаның авторы шул уҡ Александр Радулов булды. Артабан юлаевсы Александр Пережогин, Алексей Терещенко (икенсе индерҙе), Илья Ковальчук иҫәпте етегә еткерҙе. Французлар ике шайба менән генә яуап бирә алды.

Швейцарияның йыйылма командаһын отоу өсөн беҙҙең хоккейсыларға бик ныҡ тырышырға, күп тир түгергә тура килде. Дөрөҫ, иҫәпте беҙҙең хоккейсы Виталий Атюшов асты. Бер нисә матчтан Швейцария хоккейсылары иҫәпте тигеҙләне, хатта йәнә бер шайба индереп, алға сыҡты. Беренсе осор ана шулай майҙан хужалары файҙаһына 2:1 иҫәбе менән тамамланды.

Бергә ике? Ғәмәлдәге чемпион шулай уйнарға тейешме ни? Ғәрлек бит. Сәмләнмәһәң дә сәмләнерһең! Уйын штурм төҫөн алды. Илья Ковальчук иҫәпте тигеҙләне. Беҙҙең хоккейсы Алексей Морозов өсөнсө гол индереп, рәсәйҙәрҙе алға сығарҙы. Ә уйын бөттө, тигәндә юлаевсы Александр Пережогин дүртенсе, еңеүле шайбаны майҙан хужалары ҡапҡаһына йүнәлтте. Шулай итеп, рәсәй йыйылма командаһы 4:2 иҫәбе менән ауыр, әммә юғары еңеү яуланы.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә ҡала бюджеты үтәлеше тураһындағы мәғлүмәт менән БР Финанс министрлығының территориаль финанс идаралығы начальнигы Илгиз Насретдинов сығыш яһаны. Билдәләнелеүенсә, былтыр ҡала округы бюджетының килемдәр буйынса планы 101,7 процентҡа үтәлгән һәм 12,7 млрд һум тәшкил иткән, шул иҫәптән үҙ килеме 9 млрд һумлыҡ булған. Быйыл тәүге кварталда ҡала округының үҙ килеме планға ҡарата 95,6 процент булған һәм 1 млрд 734 млн һум тәшкил иткән.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә шулай уҡ мәғариф идаралығы начальнигы Азамат Сәйфуллин "Һәләтле балалар" маҡсатлы программаһы үтәлеше тураһында мәғлүмәт бирҙе. Билдәләнелеүенсә, һәләтле балалар һәм улар менән эшләүсе белгестәр һаны арта бара. Улар йыл да 18 Бөтә Рәсәй предмет олимпиадаларында, 25 конкурс һәм фестивалдәрҙә ҡатнаша. Ошо программа сиктәрендә баш ҡалала Кесе фәндәр академияһының 16 ҡала секцияһы эшләй. Шулай уҡ Бөтә Рәсәй һәм Халыҡ-ара хеҙмәттәшлек кимәленә сыҡҡан мәктәптәр һаны ла күбәйә бара.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары А. Йосопова, иҡтисад идаралығы начальнигы О. Краснова, сәнәғәт бүлеге начальнигы А. Зарубина, тышҡы иҡтисади бәйләнештәр бүлеге начальнигы Р. Мирсаяпова журналистар менән осрашты һәм ҡала округының быйылғы өс айҙағы иҡтисади хәле тураһында һөйләне. Билдәләнелеүенсә, йыл башынан алып ҡаланың эре һәм уртаса предприятиелары тарафынан етештерелгән тауар, күрһәтелгән хеҙмәт 57 млрд һумлыҡ булған , был былтырғы ошо осор кимәленә ҡарата 91 процент тәшкил итә.

✓1 майҙан Калинин районында "Өфө"ҡала ауыл хужалығы йәрминкәһе эшләй башланы. Даими йәрминкә йыл буйына көн һайын иртәнге 9-ҙан киске 20 сәғәткә тиклем эшләйәсәк. Адресы: Өфө ҡалаһы, Кольцевой урамы, 65. 35,221,225,291,299 маршрут автобустары менән барырға мөмкин.

✓Башҡортостанда Еңеү көнө алдынан ун биш мең Георгий таҫмаһы таратыласаҡ. Был былтырғы менән сағыштырғанда ике тапҡырға күберәк.

*ҺҮҘ - ХАКИМИӘТ БАШЛЫҒЫНА*

# ХАЛЫҠ АРАҺЫНДА ЙӨРӨМӘҺӘМ...

## ниҙер етмәгән кеүек



**Бөгөн "Ауылды ҡотҡарырға!" тигән саҡырыу һәр даирәлә яңғырай. Эйе, бөтөн илгә ябырылған иҡтисади көрсөк, аҡсаһыҙлыҡ, эшһеҙлек кеүек бәләләр ауылдарҙың да бәкәленә һуға. Ләкин ауылдарҙа бөгөнгө иҡтисади көрсөктө түгел, туҡһанынсы йылдарҙан бирле килгән төрлө үҙгәртеп ҡороуҙар, реформаларҙың эҙемтәләрен, йәғни рухи һәм әхлаҡи көрсөктө еңеп сығыу тураһында күберәк ҡайғырталар һымаҡ. Ғөмүмән, ни өсөн килеп сыҡҡан һуң был "Ауылды ҡотҡарырға!" тигән саҡырыу? Ошо һорауға яуапты беҙ Иглин район хакимиәте башлығы Ришат Сәлмән улы ИСХАҠОВ менән эҙләп ҡарарға булдыҡ.**

- Бөгөнгө ауыл тормошон ул ҡәҙәре фажиғәле итеп ҡарарға ярамай һәм "ҡотҡарыу" һүҙен ҡулланыу ҙа бик үк дөрөҫ түгел, - тине Ришат Сәлмән улы. - Ауылда бөгөн ас ултырған йә яланғас йөрөгәндәр юҡ. Етешлек төшөнсәһен ике төрлө ҡабул иткәндәр генә бар. Ғөмүмән, ике төрлө төркөмдәге кешеләр йәшәй унда. Беренсе төркөмдәгеләр - бөтөн нәмәгә битарафтар, тормоштан ваз кискәндәр, эсеп йөрөгәндәр. Икенсе төркөмдәге кешеләр үҙ тормошон үҙгәртергә теләй, быны эшләргә көстәре лә бар, ҡулдарынан да килә. Беҙҙең, етәкселәрҙең, төп маҡсаты - ошондай икенсе төркөмдәге кешеләргә, йәғни ауылда йәшәргә һәм эшләргә, уны күтәрергә теләгәндәргә ярҙам итеү, шарттар тыуҙырыу. Шул уҡ кешеләр беренсе төркөмдәге кешеләрҙе -тормоштан ваз кискәндәрҙе лә эшләтергә, ҡарарға, хәстәрләргә, дөрөҫ юлға төшөрөргә, алға әйҙәргә тейеш, тип уйлайым.

Ә улар тап ошо бурыстарҙы тормошҡа ашырһын өсөн беҙҙең Иглин районы ауылдарында бар шарттар ҙа тыуҙырылған. Мәҫәлән, балаларҙы тәрбиәләр һәм уҡытыр өсөн балалар баҡсалары, бынамын тигән мәктәптәр бар. Фельдшер-акушер пункттары, мәҙәниәт йорттары эшләй. Социаль яҡлау бар - хөкүмәт балалы ғаиләләргә социаль ярҙам күрһәтә, ҡарттарыбыҙға пенсия түләй. Иң мөһиме, эшләргә теләгәндәр өсөн эш урындары ла бар: беҙ бөтә ауылдарҙа ла тиерлек фермаларҙы һаҡлап алып ҡалдыҡ. Кесе предприятиелар ҙа етерлек. Түбәнге Ләмәз ауылында, мәҫәлән, һәр өйҙә тиерлек еңел автомобиль, трактор бар, һәр шәхси хужалыҡ тиерлек умарта тота, күпләп мал аҫырайҙар. Ғәбиҙуллин тигән егет һөтсөлөк фермаһын арендаға алды, эш урындарын һаҡлап алып ҡалды, унда ауылдың байтаҡ кешеһе эшләй. Ләкин ауылда эш булып та, эшләргә кеше таба алмаған саҡтар ҙа була. Мәҫәлән, беҙҙә һауынсылар, механизаторҙарға ҡытлыҡ кисерелә. Эшләмәй йөрөгән ана теге тәүге төркөмдәге берәйһенә эш ҡуш, аҡсаһы аҙ, тип яуапларға ла тартынмай ул. Бына быныһы инде ана шул туҡһанынсы йылдарҙан һуң башланған реформаларҙа шаңҡыған, үҙгәрештәр алдында баҙап ҡалған, үҙ тормошон нисек рәткә һалырға белмәй йөрөгән кешеләр. Улар "Ҡотҡарығыҙ!" тип ҡысҡыра, ә үҙҙәре үҙҙәрен ҡотҡарыу өсөн бер ни ҙә эшләмәй. Ундайҙар менән осрашҡан саҡта:"Үҙегеҙгә яҡшы булһын өсөн үҙегеҙ нимә эшләйһегеҙ һуң?"- тигән һорауҙы йыш бирәм. Ыҡ-мыҡ итәләр, ҡайһылары уйлана төшә. Уйландырырға, тәрбиәләргә кәрәк шул әле уларҙы. Кеше үҙе бер ни ҙә эшләмәй, үҙ ғүмеренең ҡәҙерен белмәй икән, ул бит етәксе килеп эшләп биргәндең дә ҡәҙерен белмәйәсәк. Шулай ҙа ҡайһы саҡта ундайҙарға ла ярҙамға ташланабыҙ, өйөнә инеп сығабыҙ, ниндәй ярҙам кәрәклеген асыҡлайбыҙ. Шундайҙар ҙа осрай: өйөнә инәһең - йыйыштырылмаған, ишек алды һеперелмәгән. Юҡлыҡ, ҡытлыҡ, аҡсаһыҙлыҡ булырға мөмкин. Ләкин иҙәнең йыуылмаған, мейесең ағартылмаған, ишек алдыңды сүп баҫҡан икән, быныһын ни тип аҡларға һуң? Юҡлыҡ икән, исмаһам, үҙеңә ярҙам итеп, үҙең яҡтыртырға тырыш тормошоңдо...

**● Шулай ҙа етәксе кешенең өйөнә инеп сығып, хәл белешеүе, ҡайһы саҡта тәнҡитләп тә алыуы эҙһеҙ үтмәйҙер - тәрбиәгә яйлап булһа ла ылыға бит кеше. Тик: "Район хужаһын күргәнебеҙ юҡ ул, йөҙгә лә танымайбыҙ", - тигән төбәктәр ҙә бар бит беҙҙә...**

- Власть дилбегәһе ҡулыңда булғанда йәмғиәткә, республикаңа ниндәйҙер файҙалы эш башҡарып ҡалырға кәрәк, тием мин. Өҫтөбөҙгә ябырылып килгән заман һынауҙарын лайыҡлы үтеү, йәшәйешебеҙҙе бер аҙға булһа ла еңеләйтеү өсөн ҡулыңдан килгәнде эшләргә кәрәк. Халыҡ етәксегә ҡарап дәртләнә йә төңөлә бит. Күп етәкселәр, белгестәр халыҡ менән күҙмә-күҙ осрашырға ҡурҡа. Эйе, ҡайһы бер ерҙә хужаларҙы күргәндәре лә юҡ. Сөнки халыҡтың һорауы күп шул. Әле эстафета үткәрҙек район ауылдары буйлап. Бөтөн тармаҡ етәкселәрен, белгестәрен алып сыҡтым был сараға. Халыҡ менән күҙмә-күҙ осрашып һөйләшәбеҙ, ниндәй мәсьәләләр борсоуын һорайбыҙ. Халыҡ тиҙ генә асылып китмәй, әлбиттә, барыһы ла һәйбәт, тигән булалар. "Ҡайҙан һәйбәт булһын, бына бит юлдарығыҙ емерелеп бөткән", тип, телдәрен асырға тырышам. Шунан бер аҙ асыла башлайҙар. Белгестәребеҙҙең барыһына ла төбәлә уларҙың һорауҙары. Халыҡ алдында уларҙан яуап талап итеп, уларҙы ла "боҙло һыуға" һалып алам. Һорауҙарҙы асыҡлап бөткәс, осрашыуға тиклем ауылда, ғаиләләрҙә күргән тәьҫораттар менән уртаҡлашам. "Ниңә тыштан йортоңдо буямайһың, ниңә кәртә-ҡуранды йүнәтмәйһең?" тим береһенә. "Һыйыр тотаһыңмы?" тим икенсеһенә. "Юҡ", тип әйтә икән, "Әйҙә, беҙ һиңә һыйыр бирәбеҙ, һауып, һөтөн эс, тик һуйып ашама" , тим. Беҙҙең районда бындай тәжрибә бар, ә күп балалы әсәйҙәргә бушлай бер һыйыр бирәбеҙ. Беҙҙең халыҡ ҡыҙыҡ бит ул. Ниндәй генә аҡсаһы булһа ла, малы булмаһа, үҙен бай тип иҫәпләмәй.

Бына шулай, халыҡ араһында йөрөп, бер аҙ уларҙың күҙенә ҡарамайсараҡ торһаң, ниҙер етмәгән кеүек була башлай...

**● Ә ауыл тормошон яҡшы яҡҡа үҙгәртер өсөн ул барыбер ҙә етәкселәрҙең күҙ алдында булырға тейеш, тип иҫәпләйһегеҙме?**

- Етәксе кешенең үҙе өсөн кәрәк был, мин ауыл халҡының нисек тын алғанын, нимәгә мохтаж икәнен белеп торорға тейешмен бит. Шунһыҙ нисек ойоштором мин үҙ эшемде? Ә ауыл кешеһе беҙһеҙ ҙә йәшәргә өйрәнде инде ул. Ҡайһы саҡта һинең кәрәк икәнде һиҙмәйҙәр ҙә. Яңы баҙар иҡтисады мөнәсәбәттәре шулай булырға тейеш тә инде. Һорауҙары шул ғына: көйгә һалып алған эштәренә ҡыҫыла, күңелдәргә бысраҡ аяҡ менән килеп инә күрмә.

Ҡайһы саҡта файҙалы эште уларға көсләп тағырға ла тура килә. "Беҙгә ниңә кәрәк ул юл? - тип кенә ебәрәләр. - Хәҙер беҙҙең ауылға ҡаланыҡылар, балыҡсылар, һунарсылар йөрөй башлаясаҡ", - тиҙәр.

"Ниңә, үткәрмәгеҙ һуң уларҙы ауылығыҙға. Шлагбаум ҡуйығыҙ әйҙә. Ауыл осонда машиналарын ҡалдырһындар ҙа йәйәүләп инһендәр. Тракторҙарҙы ла индермәгеҙ ауыл урамына", - тим. Халыҡты бына шулай төртөп ебәрһәң, атлап китә ул. Барыбер даими төртөп торорға кәрәк шул уларҙы, шунан башлай улар ҡыймылдарға, ҡамасауламай ғына эшләтергә кәрәк. Туҡтауһыҙ күрһәтмә биреп йөрөү ҙә ярамай. Туҡһанынсы йылдарҙағы үҙгәрештәрҙән һуң ана шул күрһәтмәләргә өйрәнгән халыҡ аптыранып ҡалғайны. Хәҙер хөкүмәткә ышанып ултырмаҫҡа, үҙенде-үҙең ҡайғыртырға кәрәк икәнде аңлай башланылар...

**● Иглин районы биләмәһендә миңә бер нимә айырыуса оҡшай: аҙым һайын "Юлсы, минең еремде сүпләмә", тигән яҙыуға тап булаһың. Ул яҙыу үҙенекен эшләйҙер, шулай бит?**

- Әле бына юл буйҙарында сүп таҙартыусыларҙы күргәнһегеҙҙер. Эшһеҙҙәрҙе генә түгел, асарбаҡтарҙы ла ошо эшкә егәбеҙ. Иглиндә ауыр социаль хәлдәге кешеләр бар. Эштәре лә, аштары ла юҡ бит инде уларҙың. Шуларҙы ашханала көнөнә бер тапҡыр махсус ашатабыҙ. Ашап сыҡҡас, ҡулдарына тоҡ биреп, сүп-сар йыйырға ҡушабыҙ. Күбеһе барыбер ярҙам итеүҙән баш тартмай. Ике яҡҡа ла файҙалы бит. Һәм, әлбиттә, баяғы яҙыуҙар ҙа ярҙам итә тирә-яҡты таҙа тотоуға. Кешегә "Сүпләмә!" тип бойороҡ тонында өндәшһәң, ул тыңлашмаясаҡ, ә бына "Зинһар өсөн, сүпләмә", тип, түбәнселек менән әйтһәң, әлбиттә, һүҙеңә ҡолаҡ һаласаҡтар...

**Шулай итеп...**

**Беҙ был сығышта район хакимиәте башлығы менән бөгөн көн-төн уларҙың башын ҡатырған мәсьәләләргә - муниципалитеттарға төшөрөлгән яңы реформалар, яңы закондар тураһындағы хәбәрҙәргә ҡағылманыҡ. Ябайыраҡ мәсьәләләргә арналды әңгәмәбеҙ. Һәм ошо ябай мәсьәләләр тураһында һөйләшкәндә лә оло һығымта яһарға булалыр: Ришат Сәлмән улы халыҡҡа яҡын торған, уның аһ-зарын бер һүҙҙән аңлаған, хәстәрләгән, тормошобоҙҙо алға этәргән, битараф булмаған етәкселәрҙең береһе. Ә тормошобоҙҙо ҡатмарлаштырған ҡатмарлы реформаларға килгәндә... Ришат Сәлмән улы улары алдында ла ҡаушап ҡала торғандарҙан түгел, тик "таяныу нөктәһе" генә бир. Ә уның "таяныу нөктәһе" - район халҡының, бергә эшләгән командаһының, республика етәкселәренең ышанысы.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА**
**әңгәмәләште.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

### Австралия һәм Океания шарлауыҡтары



Австралияның иң бейек шарлауығы Уолломомби тип йөрөтөлә. Ул Яңы Көньяҡ Уэльстың төньяҡ-көнсығыш яғынан аҡҡан Маклей йылғаһында урынлашҡан. Йылға 335 метрлы аҫылмалы ҡаянан төпһөҙ упҡынға ағып төшә, артабан тағы ла бер нисә һикереш яһай, шуға ла шарлауыҡтың дөйөм бейеклеге 482 метр тәшкил итә.

Уоллэймин шарлауығы бейеклеге буйынса икенсе урында тора. Уның бейеклеге 351 метр. Кэрнстан Кюрандыға китеп барған поездан Баррон шарлауығы яҡшы күренә. Уны урындағы халыҡ Австралия Ниагараһы тип тә йөрөтә. Ямғырлы миҙгелдә уның тағы ла бер исеме барлығы асыҡлана - Ҡолап барыусы диңгеҙ. 270 метрлыҡ бейеклектән аҫҡа атылыусы һыу, ысынлап та, диңгеҙҙең ҡоторонған тулҡындарын хәтерләтә.

Яңы Зеландияла ла шарлауыҡтар байтаҡ. Фьортленд (Фьордтар иле) милли паркын Сатерленд шарлауығы биҙәй. Ул Франклин тауҙарындағы Квилл күленән ағып сыҡҡан Арктур йылғаһында урынлашҡан. 248, 229 һәм 103 метрлы бер нисә баҫҡыс аша үтеүсе шарлауыҡтың дөйөм бейеклеге - 580 метр. Был шарлауыҡ үҙенең беренсе асыусыһы исемен йөрөтә һәм донъяның иң эре ун шарлауығына инә. Гавай архипелагының Кауаи утрауында донъяның эре шарлауыҡтарының береһе Кауаины күрергә мөмкин. Шунда уҡ иң гүзәл шарлауыҡ Һигеҙ быуа шарлауығын осратырһығыҙ. Йәйғор төҫтәре менән балҡыусы был шарлауыҡ тураһында утрауҙа бер риүәйәт тә йөрөй. Йәнәһе, бында ҡасандыр шарлауыҡ төбөндәге мәмерйәлә бик ҡурҡыныс зат - ярым кеше, ярым балыҡ йәшәгән, ул үҙенең торлағына яҡынлашҡан кешеләргә ташланған.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫН ЯТЛАУ...

## баланың аңын аса, фиғелен үҙгәртә



**Баш ҡаланың 136-сы башҡорт лицейында VII синыфта уҡыған Йәмил НАМАҘБАЕВ бар яҡтан да өлгөр уҡыусы итеп танылырға өлгөргән. Күп бәйгеләр, олимпиадаларҙа ҡатнашып, төрлө кимәлдәге еңеүҙәр яулаған. Былтыр республика театрҙары араһында үткәрелгән балалар өсөн спектаклдәр бәйгеһендә жюри ағзаһы булып, профессиональ актерҙарҙың оҫталығын да баһалаған. Әле күптән түгел булып үткән "Шаяниум-2009" конкурсында "Иң яҡшы ир-егет" номинацияһына лайыҡ булған. Ошондай әүҙем, һәләтле малайҙың үҙенә һүҙ бирәйек әле.**

- Әбйәлил районының Рауил ауылында тыуғанмын мин. Өфөгә күсеп килгәс, икенсе синыфтан алып 136-сы башҡорт лицейында уҡый башланым. Белемдең ни тиклем мөһим булыуын, ни өсөн мәктәпкә йөрөргә кәрәк икәнен әсәйем бәләкәй саҡтан төшөндөрә килде. Өсөнсө-дүртенсе синыфтарҙа уҡыуға ныҡлап тотондом. Әгәр ҙә әсәйем белем алыуҙың әһәмиәтен ваҡытында аңлатмаһа, мин уҡыу алдынғыһы ла булмаҫ, "Урал батыр"ҙы ла ятламаҫ, ғилми эшемде лә яҙмаҫ, конкурс-олимпиадаларҙа ла ҡатнашмаҫ инем. Былтыр мәктәптә уҡыуҙа өлгәшкән һөҙөмтәләр буйынса йыл уҡыусыһы булдым, Баш ҡала кимәлендә үткән "Урал батыр" бәйгеһендә ҡатнашып, Гран-при алһам, республика конкурсында "Тамашасы һөйөүе"нә һәм икенсе урынға лайыҡ булдым.

Бәйгелә үҙем өсөн ҡыҙыҡ бер нәмә астым. Эпос ятлап, бәйгегә әҙерләнгән балалар менән урамда йүгереп уйнап йөрөгән балалар араһындағы айырма ер менән күк араһындағылай икән. Бәйгелә ҡатнашыусы тиҫтерҙәрем гел алға ынтылыусан, ҙур маҡсаттар менән яналар. Төрлө яҡтан үҫешкәндәр, уҡыуҙа ла өлгәшәләр, мәктәптән тыш та ниндәйҙер шөғөл, мауығыуҙары бар. Талантлылар. Эпосты һөйләгәндә лә берәүҙәре думбырала уйнай, икенселәре ҡурайҙа һыҙғырта. Минең уйымса, был дөрөҫ. Сөнки эпосты яҙып алған Мөхәмәтша Буранғолов шулай тип әйткән: "Һәр кеше эпосты үҙенсә аңлай. Шуға күрә лә һәр кеше эпосты үҙенсә башҡарырға тейеш". Балалар уның әйткәнен тота. Конкурс ун йыл дауамында бара бит инде. Ошо мәшһүр эпосты балалар ятлап, һөйләп йөрөй икән, тимәк, халҡыбыҙҙың рухын, мәҙәниәтен артабан дауам итәсәк яңы быуын үҫеп килә.

"Урал батыр" эпосын мин дә ныҡлап өйрәндем. Уҡытыусым тәҡдиме буйынса ғилми эш яҙырға булдым. "Урал батыр" эпосының ысын шәхес тәрбиәләүҙә ыңғай йоғонтоһо" тип аталған ғилми эшемдә мин эпоста ҡуйылған проблемаларҙың бөгөнгө көндә лә актуаль булыуын күрһәттем. Яҡшылыҡ менән яуызлыҡ, мәкерлек менән изгелек, ата һәм ул мөнәсәбәттәре кеүек проблемаларҙың кисҡен төҫ алып китмәүенә айыҡ аҡыл, миһырбанлыҡ булышлыҡ итәсәк, тип әйтергә тырыштым. Бәләкәй генә ғилми эшемдә темаға асыуға өлгәштем, тип уйлайым. Бәләкәй фондар академияһы үткәргән ғилми эштәр конкурсында район, ҡала кимәлендә еңеп, республика финалына сыктым.

Шуны билдәләп үтке килә: "Урал батыр" эпосы киләсәк быуынды тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай ала. Борон-борондан ата-балаларыбыҙ тәрбиә алымдарының береһе итеп ауыҙ-тел ижадын ҡулланған. Һәр башҡорт үҙенең балаһына йыр өйрәткән. Бала аңына яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, әхлаҡи нормалар, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, батырлыҡ төшөнсәләре сәңгелдәктән алып әсәйҙең йырҙары аша һеңдерелә килгән. Ошо йолаларҙың онотоу, баланы үҙ-үҙе менән яңғыҙ ҡалдырыу, тәрбиәгә игтибарҙы кәметеү - милләтебеҙҙең рухи яҡтан ярлыланыуына, әхлаҡи нормаларҙың һанға һуғылмауына сәбәптер. Фәһемле ауыҙ-тел ҡомартҡыһы булараҡ, эпосты, көнкүреш шарттарына яраҡлаштырып, тәрбиә маҡсаттарында ҡулланырға кәрәк.

Баланың әхлағы, үҙен аңлай башлауы кес кенә саҡтан килә. Әммә тәрбиәне аңлау кимәле төрлө булыуы ла асыҡ күрһәтелә эпоста. Әйтәйек, бер үк шарттарҙа үҫкән Урал менән Шүлгән ҡапма-ҡаршы образдар булып китә. Был бөгөнгө көндә лә бер ғаиләлә үҫкән балаларҙың төрлө булыуына ишара. Шүлгәндең кеше ҡотҡоһона бирелеп эшләгән бер аҙымы башҡа йүнһеҙлектәренең башы булып тора.

"Урал батыр" эпосында бөгөнгө көн әфәте булған эскелек проблемаһы ла күтәрелә. Бөтөн яуызлыҡтарҙың башы булып ошо тора ла инде. Ләкин эпоста иҫерткес ролен араҡы, хәмер түгел, ә ҡан уйнай. Ҡанды эскән Шүлгән, һөҙөмтәлә, залимға әйләнә. Ата-әсә һүҙен йыҡмаған Урал айыҡ аҡылын һаҡлап ҡала. Эпоста Уралдың әҙәрлеклеүенән ҡасып, ҡулдә ҡотолоп ҡалған дейеүҙәр, ен-пәрейҙәр беҙҙең заманда наркоманлыҡ, эскелек кеүек афәттәр ҡиәфәтендә ҡалҡып килеп басты.

"Урал батыр"ҙы уҡып сыҡҡандан һуң шундай һорауҙарға яуап бирергә тырыштым: кеше ниндәй булырға тейеш, уның тормошта йәшәү мәғәнәһе нимәлә? Һорауға яуап эпос юлдарында. "Донъяла мәңге ҡалыр эш - ул да булһа яҡшы эш". Урал батыр яҡшы эше менән үҙенән һуң матур эҙ ҡалдыра. Яҡшылыҡ тигән үтә лә киң, тәрән, күләмле мәғәнәне халыҡ мәңгелек тип баһалаған. Кешенең ғүмере йәшәгән йылдары менән түгел, ә ер йөҙөндә ҡалдырған яҡшы эштәре менән баһалана. Минең уйлауымса, "Урал батыр" эпосы ошо уйҙы, хәҡиҡәтте раҫлаусы ҡомартҡы. Әҙәм заты һәр аҙымын аҡылы менән үлсәй алмай. Был мөмкин дә түгел. Әҙәмде әхлаҡи ҡиммәттәр, күркәм ғәҙәттәр үлсәйҙер. "Урал батыр" аша беҙ ошо күркәм ғәҙәттәрҙе балаларҙа тәрбиәләй алабыҙ.

Кеше яҡшы ғаиләлә үҫһә, атаәсәһе уның турала хәстәрләһә, яҡшы эштәргә өйрәтеп, насарҙарынан тыйып ҡалһа, бала, ысынлап та, яҡшы булып үҫәсәк. Тормошонда ла уның үҙ фекере, уйы, ҡарашы буласаҡ. Килеп сыҡҡан ҡаршылыҡтарҙы еңел үтәсәк. Тормош көртәләренә, ҡамауҙарына эләкмәйәсәк. Кем булыуың, юғары дәрәжәләр ҙә мөһим түгел, ябай һөнәр эйәһе булып та ҙур эштәр атҡарып була. Урал һымаҡ данлы батыр булмаһаң да, ғүмерең заяға үтмәсҡә тейеш. Халыҡ әйтемендәгесә, тыуғанында һин илағанһың - халыҡ ҡыуанған, үлгәнеңдә һин ҡыуанаһың - халыҡ иларға тейеш...

**Шулай итеп...**

**"Урал батыр" Мәскәүҙә лә яуланы, тип, мәҡәлә баҫылырға торғанда редакцияға Йәмил килеп етте. Кесе Фәндәр академияһының конкурсында еңгәндән һуң, егеткә Мәскәүҙә үтәсәк "Фәндә беренсе аҙымдар" конкурсында ҡатнашырға тәҡдим итәләр. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт әҙерләктән һуң, рус теленә тәржемә ителгән эш Мәскәү зыялылары хөкөмөнә сығарыла. Егет Мәскәүҙә лә ҡаушап ҡалмай, республиканың данын лайыҡлы яҡлап, "Әҙәбиәт" секцияһында еңеүсе тип табыла. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән бәйгеселәрҙе, жюри ағзаларын таң ҡалдырып, Йәмил сәхнәне бер мәлгә башҡорт донъяһына әйләндерә. Ҡурай моңо, ҡумыҙ сыңы, башҡорт һәм рус телдәрендә яңғыраған "Урал батыр" эпосы барыһын да шаҡ ҡатыра. Йәмилгә беренсе урын биреүҙән башҡа сараһы ҡалмай жюри ағзаларының. Ә бит бәйгеселәр ҙә ябайҙарҙан булмай: кемелер кесе йәшенә ҡарамаҫтан, фантастик роман, икенсеһе "Незнайка" мультфильмының дауамын яҙған. Егермегә яҡын эш араһынан беҙҙең егеттең ғилми эше иң яҡшыһы, тип табылған. Бүләкләү тантанаһы ваҡытында бер жюри ағзаһы сәхнәгә сығып: "Урыҫ булмауың арҡаһында президент булмаҫһың, әммә киләсәктә һине премьер-министр урынында күреүебеҙ бик ихтимал ", - тип егеттең ҡулдарын ҡыҫҡан.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

ҠАРА ҺИН УНЫ!

# ТӘБИҒӘТТЕ ҺАҠЛАЙЫҠ!

## Был саҡырыу Францияға ла ишетелде...

**Республикабыҙ мәктәбе уҡыусылары әленән-әле үҙҙәренең уңыштары, ҡаҙаныштары тураһында хәбәр итә. Уларҙың уңышы беҙҙең дә ҡыуанысыбыҙ, сөнки ошо балалар ҡулында беҙҙең киләсәгебеҙ бит. Хәҙер генә үҫеп етерҙәр, тағы ла ҙурыраҡ уңыштар ҡаҙанырҙар, милләтебеҙ өсөн ҙур эштәр башҡарырҙар... Киләсәкте шулай матур, яҡты күҙаллау өсөн нәҡ әлеге мәктәп уҡыусыларын аҡыллы, белемле, әҙәпле, тәрбиәле итеп күргե килә.**

Һеҙ һүрәттә күргән был ҡыҙ Баишева Карина булыр. Ул Өфө ҡалаһының 144-се башҡорт гимназияһының 2-се класында белем ала. Әле бәләкәй булһа ла бик ҡыйыу, сос, аҡыллы ҡыҙ икәне күренеп тора, гел "5" билдәләренә генә өлгәшә, мәктәп тормошоноң уртаһында ҡайнап йөрөй.

Карина икенсе йыл рәттән үҙенең "Әйләнәтирәбеҙҙәге тере тәбиғәтте һаҡлайыҡ" тип аталған проекты менән ЮНЕСКОның Башҡортостанда үткәрелгән "Мәктәп проекттары турниры" сессияһында сығыш яһай. Үҙенең ҡыйыу сығышы, матур телмәре, сослоғо менән бөтәһен дә таң ҡалдыра ҡыҙ. Ҡала мәктәптәре араһында уҙғарылған проектта үҙенең проекты менән тик Карина ғына Францияға барыу бәхетенә өлгәшә. Ул унда ЮНЕСКОның йыл һайын уҙғарылған бөтә донъя экспедицияһында ҡатнаша. Экспедиция ЮНЕСКО эштәре буйынса Башҡортостан Республикаһы комитеты тарафынан ойошторола. Экспедицияның маҡсаты-Европала ЮНЕСКОның бөтә донъя мираҫын өйрәнеү, Париждағы штаб-квартираны күреү, осрашыуҙарҙа, презентацияла башҡорт мәҙәниәтен, сәнғәтен күрһәтеү, Башҡортостан Республикаһындағы мәктәп уҡыусылары йәшәйеше менән таныштырыу була.

Тәбиғәт тураһында теманы осраҡлы ғына һайламаған Карина. Тәбиғәтте шул тиклем ярата ул, кешеләрҙең шундай матурлыҡты, иҫ киткес гүзәллекте һаҡламауына, әрәм итеүенә йөрәге әрней. Яҙ, йәй көндәре ҡоштар һайрауын тыңларға, төрлө бөжәктәр менән уйнарға, күк йөҙөндәге аҡһыл болоттарҙы күҙәтергә, ә көҙгөһөн тәбиғәттең төрлө төҫкә инеүен, ҡыш миҙгелендә бөтә ер йөҙөнөң аҡ ҡар аҫтында тыныс ҡына йоҡлауын күҙәтергә ярата. Карина ер йөҙөндәге тереклекте әлеге матурлығында һаҡлар, еребеҙ экологик яҡтан таҙа булһын өсөн яҡшы уҡып, белем алып, ҙурайғас, мотлаҡ биолог булырға һәм кешеләрҙе тәбиғәтте һаҡларға өйрәтергә хыялланa.



Һәр йәйҙе ата-әсәһе менән баҡсала уҙғара. Атаәсәһенә сәскәләр, йәшелсә, емеш-еләк үҫтерергә ярҙам итә. Баҡсаларында үҙенең ҡырмыҫҡа иләүе лә бар икән. "Ҡырмыҫҡалар - үҙе бер мөғжизә! Уларҙың эш һөйөүсәлегенә иҫ китерлек! Көнө буйы үҙҙәренең иләүҙәренә төрлө үҫемлек һабаҡтары, таптар ташыйҙар, һис кенә лә арымайҙар. - ти Карина. - Тәбиғәт тураһында тапшырыуҙар ҡарайым, китаптар уҡырға яратам. Кешеләр урманда сүп-сар ҡалдырып китеү арҡаһында тәбиғәт бысрай, усаҡтарын һүндереп китмәүселәр арҡаһында янғындар сыға, бер сәбәпһеҙгә кейек-ҡоштарҙы аталар, океанға нефть түгелгәнгә күрә күпме балыҡтар, ундағы беҙ әле белеп тә бөтмәгән күпме йән эйәһе үлә! Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ, йыл һайын ер йөҙөндә балыҡтарҙың, үҫемлектәрҙең, кейек-ҡоштарҙың бер нисә төрө юҡҡа сыға. Беҙ үҫкәнсе ҡайһылары ғына ҡалыр һуң? Мин бөтә Ер йөҙөндәге кешеләрҙең тәбиғәтте һаҡлауын теләйем. Беҙҙең Еребеҙ әлеге матурлығында, гүзәллегендә мәңге һаҡланһын ине".

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**

*✓ Кешенең тәбиғәтенә оялсанлыҡ тойғоһо ла һалынған бит. Шуға күрә оялыу культын үткәреү кәрәк хәҙер. Был йәһәттән миңә башҡорт театрының "сисенмәүе" оҡшай.*



# ИЖАД КЕШЕЛӘРЕ ӨСӨН

## “Әллә донъя көтөргә,

**Мәғлүмәт быуаты әҙәм балаһының башына меңәрләгән һорауҙарҙы яуҙырып ҡына тора. Уларға яуап бирмәҫкә лә, "йортом ауылдың ситендә", тип тыныс ҡына йәшәп ятырға ла булыр ине. Әммә был һорауҙар тыныс йәшәргә бирмәҫ шул, сөнки улар көнитмешебеҙгә, киләсәгебеҙҙең ниндәй булырын тәьмин итер мәсьәләләргә бәйле. Һәр бер кеше кеүек, ижад кешеләренә лә был һынауҙы үтергә тура киләсәк. Заман прагматизмына хәҙер иҡтисади көрсөк өҫтәлде һәм ижад кешеһе Шекспирҙың киң билдәле һорауына тағы ла яҡыныраҡ килеп баҫты. Тағы ла бар кеше кеүек үк, ижад кешеһе лә "Әллә донъя көтөргә, әллә Бохар китергә?" тигән һорау алдына килеп баҫа. Ошо хаҡта, ғөмүмән, ижад кешеһенең йәшәйеше, тормошҡа ҡарашы, принциптары хаҡында "Башҡортостан" киностудияһы сценарисы Зөһрә Бураҡаева менән М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры режиссеры Илнур Муллабаев әңгәмәләшә.**

**▶ Беҙ тарихҡа боролоп ҡараһаҡ, сәнғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт үҫешенең "алтын", "көмөш" быуаттарын, "яңырыу" дәүерҙәрен күрәбеҙ. Һәр бер дәүер, быуат, ижтимағи ҡоролош алмашыныу менән ул осорҙоң сәнғәте, мәҙәниәте һәм әҙәбиәте лә үҙгәреш кисергән. Ҡайһы осраҡта үҙгәреш иң тәүҙә әҙәбиәттә, мәҙәниәттә һәм сәнғәттә башланып, аҙаҡтан тормошҡа күскән, ижтимағи ҡоролош формаһында сағылған. Әммә беҙ яңы быуатҡа, яңы мең йыллыҡҡа аяҡ баҫҡанда һаман да совет осоронда алған инерциянан ҡотола алмайбыҙ һымаҡ. Яңылыҡтың булмауының сәбәптәрен һеҙ ниҙә күрәһегеҙ?**

**З. БУРАҠАЕВА:** Советтар Союзы тарҡалып, сиктәр асылғандан һуң сит илдәрҙә йәшәүселәр беҙҙән көслө диссидент әҙәбиәт көтөүен йәшермәй. Баҡтиһәң, был ҡоролоштоң бетоны бик ауыр булып, унын аҫтында тик тапалған үлән генә күргәндәр. Ә булғандарын инде, Высоцкий, Солженицын, Ахматова, Пастернак кеүек авторҙарҙы, бөтә донъя былай ҙа белә ине инде. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғандан алып бөгөнгөгә тиклем арауыҡты мин "сисенеү дәүере" тип атайым. Кешелә тура мәғәнәһендә һәм кинәйәләп әйткәндә лә, сисенеү, яланғасланыу ихтыяжы барлыҡҡа килде. Был ихтыяждың ни өсөн килеп сығыуының ике төрлө объектив сәбәбен әйтеп булалыр. Тәүгеһе - оҙаҡ ваҡыт көслөк менән биткә, өҫкә, асылға ябылған ҡорғанды, япманы алып ырғытыу теләге, икенсеһе - таҙарыныу ихтыяжы. Таҙарыныу өсөн өҫтөңдәге бысраҡ кейемде һалыу, яланғас ҡалыу мотлаҡ. Былар, әлбиттә, тағы ла кинәйә менән әйтелә. Ә бит "сисенеү"ҙе - күңеленде асып күрһәтеүҙе тән асыҡлығын күрһәтеү тип аңлаусылар, йәғни мәсьәләнең төп асылын аңламаусылар әҙәбиәттә һәм сәнғәттә "шәп-шәрә" әҫәр өлгөләрен барлыҡҡа килтерҙе. Әлбиттә, кеше экранда, һынлы сәнғәттә, сәхнәлә, әҙәбиәттә ҡапыл сисенмәне, яйлап-яйлап өҫ кейемен һалып ырғытып, иң һуңынан инәнән тыума көйө тороп ҡалды. Һынлы сәнғәттә, театрҙа, кинола, әҙәбиәттә лә "сисенеү" күҙәтелә. Нимә генә яҙмайҙар хәҙер? Күңел яланғаслығын күрһәтеү өсөн хатта һүгенеү һүҙҙәрен дә ҡулланып яҙған әҫәрҙәр (әммә уларҙы әҙәби һәм сәнғәт әҫәре тип атап булмай) барлыҡҡа килде. Хәҙер кеше бөтә тәнен, эске донъяһын, комплекстарын күрһәтте, инде күрһәтер нәмәһе ҡалманы уның. Хәҙер күптәр, урыҫтар әйтмешләй, "Ради красного словца и не пожалели отца", тигән кимәлгә барып етте. Йәғни ҡайһы берәүҙәр иғтибар йәлеп итер, оригиналь булып күренер өсөн үҙҙәрен тыуҙырған ата-әсәһен, ата-олатайҙарын, туғандарын, дуҫтарын әҙәбиәт, сәнғәт аша асыҡтан-асыҡ тәнҡитләй, уларҙың кәмселектәрен яҙа башланы. Мария Арбатова кеүек авторҙар үҙенең аҙып йөрөүен ҙур әҙәбиәт битенә сығарырға тырыша. Әйтәйек, улар нисә ир-ат менән енси мөнәсәбәткә инеүе хаҡында китаптарына яҙалар, шунда уҡ һөйәрҙәренең исемлеген килтерәләр.



*Минеңсә, фатирҙың ҡиммәте уның кирбесендә, ҡомонда, цементында, һыуында һәм арматураһында түгелдер, ә эстәге азатлығындалыр. Был - шәхси мөхит һәм унан бер кем дә килеп һине ҡыуалап сығара алмай. Шуға күрә лә беҙ, һеҙ әйткәнсә, төҙөлөш материалдарын түгел, эстәге азатлығын һатып алабыҙ. Фатир - ул бәләкәй генә дәүләт. Шул уҡ ваҡытта дөйөм ятаҡ дәүләт була алмай.*

Шулай итеп, "сисенеү"ҙең сигенә барып етеп, танһыҡ ҡандырыусылар артабан "Ни эшләргә?", тигән һорау алдына килеп баҫты. Ни өсөн тигәндә, хәҙер инде сисенеү ҙә ҡыҙыҡ булмай башланы. Хәҙер, минең уйымса, был көрсөктән сығыуҙың берҙән-бер юлы - асылға ҡайтыуҙыр. Ысынлап та, был донъяла рухи ҡиммәттәр бармы ул, тигән һорауға һәр кем үҙенсә яуап эҙләй башланы. Кешенең тәбиғәтенә оялсанлыҡ тойғоһо ла һалынған бит. Шуға күрә оялыу культын үткәреү кәрәк хәҙер. Был йәһәттән миңә башҡорт театрының "сисенмәүе" оҡшай.

**И. МУЛЛАБАЕВ:** Советтар Союзы заманы беҙҙең баласаҡ осорона тура килде. Нисек кенә әрләмәһендәр хәҙер, коммунистар партияһы барыбер кешеләргә йәшәр өсөн рух бирә торғайны. Кемдер берәү әйтмешләй, "Советтар Союзында секс булманы, тик балалар нисектер тыуып торҙо". Ҡыҫҡаһы, ул дәүерҙең кеше өсөн ыңғай яҡтары бик күп булды. Шунан һуң, әсәйем әйтмешләй, "Компартия бөткәйне, драматургтар нимә тураһында яҙырға белмәй ултыра". Минең иң яратып ҡараған кинофильмдарым совет осоронда төшөрөлгән. Бондарчуктың, Шукшиндың, Быковтың геройҙары бер ҡатлы, тиҙ ышаныусан итеп һүрәтләнгән яҡты фильмдарын һағына башланыҡ. Ундай фильмдар хәҙер төшөрөлмәй.

Советтар Союзы емерелеп, ҡорғандар асылғайны, бирҙәләге йыуынты һыуҙы халыҡтың өҫтөнә һиптеләр. Канализация шартланы һәм халыҡ шунын эсендә ҡалды. "Сисенеп" бөттөләр, әллә нимәләр кейеп бөттөләр, эт ашамаҫ һүҙҙәрҙе һөйләй башланылар, ҡыҫҡаһы, оят тойғоһо юҡҡа сыҡты. Хәҙер халыҡ быңдай хәшәрәтлектән туйҙы, барыһын да аңланы. Хәҙер уның йыуынғыһы, таҙарынғыһы килә. Бының өсөн сәхнәлә, кинола, әҙәбиәттә күберәк яҡты хистәр тыуҙырыуға һәләтле әҫәрҙәр ҡуйылырға һәм яҙылырға тейештер. Әле беҙҙең академтеатр "Балаҡайҙарым" спектакле менән Яр Салдыға барып ҡайтты. Тамашасылар "был спектаклде ҡарағас, һәр беребеҙ әсәйҙәребеҙгә шылтырата башланыҡ", тип аптыратты. Был һүҙҙәр спектаклгә бирелгән иң ҙур баһалыр, тип уйлайым. Беҙ хәҙер атай-әсәйебеҙҙе, балаларыбыҙҙы онотабыҙ, һәр ҡайһыбыҙ нисек булһа ла күберәк аҡса эшләү маҡсаты менән генә йәшәй. "Толстойҙары, Достоевскийҙары, Чеховтары, Гоголдәре, Пушкиндары, Лермонтовтары булған рус әҙәбиәте бөгөн үлде инде...", тип әйткәйне берәү. Ысынлап та, беҙҙең илдәге "аң боҙлоғон" иретер өсөн яҙ кәрәк. Бының өсөн беҙгә йыуынырға, икенсе төрлө әйткәндә, тәһәрәтләнергә кәрәк.

**З. БУРАҠАЕВА:** Минең башҡорт театрҙарына теләгем бар. Сөнки сит ил, күрше республикаларҙың әҫәрҙәрен ҡуйыуҙы башҡорт драматургияһын үҫтереү тип атай алмайым. Ни өсөн тигәндә, драматург театрҙан тыш үҫешә, камиллаша алмай. Бының өсөн уларҙы театрҙарға йәлеп итергә, улар менән туҡтауһыҙ эшләргә генә кәрәк. Әле беҙҙең театр "әҙергә - хәҙер" юлы менән бара.

**▶ Ҡапма-ҡаршылыҡҡа, идеялар көрәшенә, конфликтҡа ҡоролмаған әҙәби әҫәрҙең, бигерәк тә сәхнә, кино әҫәренең тамашасы, уҡыусы өсөн ҡыҙығы булмай. Әйтергә кәрәк, конфликтһыҙ ваҡиғалар үҫеше лә, тимәк, әҫәр ҙә юҡ тигән һүҙ. Совет осоронда беҙ был күренеште ике ижтимағи лагерҙың идеялар көрәше итеп таныныҡ, геройҙарыбыҙҙы ыңғайҙарға һәм кирeләргә, ярлыларға һәм байҙарға бүлдек. Хәҙер килеп, тормош үҙгәргәс, ҡиблалар алмашынғас, төшөнсәләр ҡапма-ҡаршылыҡлы мәғәнәүи төҫ алғас, ижад кешеһе аптырашта ҡалды. Кем һәм нимә ул хәҙерге заман әҙәбиәтенең, сәнғәтенең антагонист ролен башҡарыусыһы?**

**З. БУРАҠАЕВА:** Хәҙерге заман башҡорт әҙәбиәтендә, сәнғәтендә төп антагонист - ул рухһыҙлыҡ. Билдәле, рухһыҙлыҡтың ҡапма-ҡаршы яғында башҡорт рухы тора. Мин һәр ваҡыт бер тарихи фактҡа һоҡланып һәм ғәжәпләнеп йәшәйем: ни өсөн ҡасандыр Уралтауҙа көн күргән төрлө-төрлө холоҡло ырыу вәкилдәре, бер көн килеп берләшеп, бер ҡорға тупланып, үҙҙәрен башҡорт тип атай башлаған һуң? Ниндәй көс уларҙы бер ҡәүем атамаһын ҡабул итергә мәжбүр иткән? Башҡорт бер ҡасан да ситтәрҙең еренә дәғүә итмәгән, тәбиғәт биргән ризыҡ менән генә туҡланған, таш диуарҙар төҙөп, унда бикләнеп, аҡылдан яҙыр сиккә етеп ултырмаған. Бына ошондай асылдан киткән, алыҫлашҡан кеше - ул антагонист. Минеңсә, башҡорт сәнғәтенең, әҙәбиәтенең, мәҙәниәтенең төп маҡсаты ла рухһыҙлыҡ менән көрәшеү булырға тейеш. Бына беҙ "Рәхмәт" фильмында тап ошо фекерҙе әйтергә теләнек тә инде. Әйтә алдыҡ шикелле. Унда башҡорт асылынан алыҫлаша башлаған ирҙең тормошонан бер көн һүрәтләнә. Уны Мәскәй әбей үҙ милли асылына кире ҡайтара.

**И. МУЛЛАБАЕВ:** Хәҙер, үкенескә ҡаршы, сәнғәт, әҙәбиәт әһелдәре эшмәкәрлеге "Мин быны нисә һумға һата аласаҡмын?" тигән һорауҙан башлана. Фекерләүҙә европалашыу бара хәҙер. Прагматизм өҫкә сыға. Ә ысын ижадсыларға килгәндә инде, тарихтан да, хәҙер ҙә шуны беләбеҙ: уларҙың күбеһе хәйерселектә үлә. Беҙҙә әле талантты йәмғиәткә генә хеҙмәт иттерә беләләр, тик үҙенә түгел. Талант үҙ көсөн, талантын, һаулығын йәмғиәткә биргәндән һуң шул уҡ йәмғиәт уны эсендәге шарабын эскән буш шешә кеүек тышҡа ташлай.

Зөһрәнең театрҙар репертуарына белдергән дәғүәләре менән килешәм. Беҙгә был йәһәттән ут күршеләребеҙ - Татарстандан үрнәк алырға кәрәк. Улар йыл һайын "Иң яҡшы татар драма әҫәре" тигән конкурс үткәрә. Конкурс өсөн лайыҡлы бағымсыларҙы йәлеп итәләр. Был йүнәлештә эҙмә-эҙлекле эшләйҙәр һәм йәш драматургтары барлыҡҡа килә. Ә ниңә беҙгә лә "Иң яҡшы башҡорт драма әҫәре"нә конкурс иғлан итмәҫкә һуң? Минеңсә, беҙ ҙә шундай уҡ конкурсты ойоштороһаҡ, йәш шағирҙар, прозаиктар, журналистар ғына түгел, өлкән синыфтағы уҡыусылар ҙа пьеса яҙырға тотонасаҡ. Беҙ, ниңәлер, драматургтарҙы тик шағирҙар һәм прозаиктар араһынан ғына эҙләйбеҙ. Ижад даирәһе тик улар менән генә сикләнмәй бит.

**▶ Замандың "клиплы фекерләүе" менән ауырыған йәштәребеҙ хәҙер классик темаға ҡуйылған спектаклдәргә йөрөй һалып бармай. Әммә был күренеште йәштәрҙең милли мәҙәниәткә битарафлығы тип тә атап булмай. Сөнки театр залында йәштәр әллә ни күренеп бармаһа ла, милли эстрада концерттарына, ток-шоуҙарға, конкурстарға, КВН-дарға улар эркелеп йөрөй. Йәштәрҙе ысын сәнғәткә йәлеп итеүҙең ниндәй юлдарын табырға булыр ине тип уйлайһығыҙ? Улар ниндәй ҡиммәттәр өлгөһөндә тәрбиәләнергә тейеш һуң?**

**И. МУЛЛАБАЕВ:** Иҡтисади көрсөк рухи көрсөктөң дауамы ғыналыр ул. Мин тағы ла быға фекер кризисын да өҫтәр инем. Дөрөҫөн әйткәндә, хәҙер кешенең баш мейеһен “йыуыу”, фекерләүҙе бер төрлө итеү, тигеҙләү бара һәм был махсус рәүештә эшләнә. Ошо фонда беҙҙең йәштәр нисек һынлана һуң? Хәҙерге башҡорт йәштәренең мин ике төрлө бүленешен күрәм. Берәүҙәре "көн үтһен, сабата туҙһын", тип, тормошта тик ҡулланыусы сифатында ғына, пассив рәүештә йәшәй, ҡайҙалыр эшләй йә уҡый, үҙенә юғары маҡсаттар ҡуймай. Уларҙың араһында эскелеккә бирелеүселәре лә байтаҡ. Икенсе төркөмгә ҡараусылар иһә ауылда тыуып үҫеүҙәренә ҡарамаҫтан, донъялағы иң престижлы һаналған һәм уҡырға инеүе танышлыҡһыҙ һәм аҡсаһыҙ бөтөнләй мөмкин булмаған университеттарға, академияларға инеп китә. Төрлө йүнә-

# МӘҢГЕЛЕК ҺОРАУ:

## әллә Бохар китергә…”

лештәге халыҡ-ара, бөтә донъя конкурстарында ҡатнашып, еңеп сығалар, гранттар яулайҙар. Улар эсмәйҙәр, тартмайҙар, бер нисә тел беләләр, электрон технология донъяһында һыу кеүек йөҙәләр, дингә биреләләр, эскелеккә, наркоманлыҡҡа ҡаршы көрәшеүсе ижтимағи ойошмаларҙа ҡатнашалар. Бәхеткә күрә, бар ундай йәштәребеҙ, тик беҙ әлегә уларҙың күбеһе менән таныш түгелбеҙ, шуға күрә ундай йәштәребеҙҙең милләт тормошонда тотҡан урынын да билдәләй алмайбыҙ. Әммә мин түбәндәге ошо ике бүленештең урталығын, йәғни түбәнгә төшкән һәм юғарыға күтәрелгәндәрҙең араһында торған йәштәрҙе белмәйем. Белмәйем, бәлки, улар барҙыр, һирәктер. Күп осраҡта бит милләт яҙмышын урта звено, икенсе төрлө итеп әйткәндә, инфраструктура хәл итә. Урталыҡ - ул өҫ яҡ менән аҫ яҡты тоташтырыусы, икенсе төрлө әйткәндә - контроль хеҙмәте.

Минеңсә, йәштәрҙе ысын сәнғәткә йәлеп итеүҙең юлы ғаиләләге тәрбиәнән башланырға тейештер. Мин, мәҫәлән, улымды төрлө сит илдәрҙең ужастиктар, роботтар тураһындағы компьютер йәнһүрәттәрен ҡарауҙан тыям. Йәштәрҙе ниндәй ҡиммәттәр менән тәрбиәләүҙе билдәләр алдынан иң тәүҙә уларҙы ҙур залдарға йыйып, цензураһыҙ асыҡтан-асыҡ диалог ҡороп ҡына билдәләргә булалыр ул ҡиммәттәрҙе. Беҙ күп осраҡта йәштәребеҙгә үҙебеҙ ҙә инанып етмәгән ҡиммәттәрҙе көсләп тағырға маташабыҙ. Минеңсә, хәҙерге заманда саф мөхәббәтте, ғаилә ныҡлығын, балалар бәхетен ул ҡиммәттәрҙең нигеҙе итеп ҡабул итергә кәрәктер.

Икенсенән, әгәр ҙә минең ҡатыным балабыҙ тыуып, йыл ярым үткәндән һуң ай һайын 60-70 һум пособие ала башлай икән, ниндәй ҡиммәттәр хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин? Баяғы беҙ һүҙ алып барған ҡиммәттең дә хаҡы шул сама була бит инде. Бына нисек тора мәсьәлә. Әгәр ҙә улым ҙурайғандан һуң был хаҡта белеп ҡалһа, ныҡ аптыраясаҡ та: "Атай, әсәй, һеҙ шул аҡсаға нисек йәшәнегеҙ һуң?", - тип һораясаҡ бит. Беҙ уға: "Мөхәббәтебеҙ көслө булды, шуның менән йәшәнек", - тип яуап бирергә мәжбүр буласаҡбыҙмы? Ошонан һуң уны нисек итеп ниндәйҙер ҡиммәттәр менән йәшәү зарурлығына ышандыра алырбыҙ икән? Был законды сығарыусылар балаға йәш ярым тулғандан һуң ул ҡапыл ашауҙан туҡтай, тип уйланылармы икән?

Мин бер мәл дауаханала сәстәр үрә торорлоҡ хәлгә осраным. Ауыр хәлдә һуғыш ветеранын алып килделәр. Тик табиптар уны ҡабул итеп алырға теләмәй, шул уҡ ваҡытта сығарып та ебәрмәйҙәр. Һуңынан ғына аңлап ҡалдым: аҡса төрткәнен көтәләр икән дә. Мин бында хатта табиптарҙы ла ғәйепләргә теләмәйем. Улар ошондай шарттарға ҡыуалап индерелгән. Бында ла ниндәй ҡиммәттәр хаҡында һүҙ йөрөтөргә була?

**З. БУРАҠАЕВА:** Мин бында табиптарҙы барыбер ғәйепләйем, Илнур. Улайға китһә, һәр кешегә лә бит эш урынында урлашыуға ҙур мөмкинлек бирелгән. Һәр кешенең аҙнаһына биш көн булһа ла урлашырға мөмкинлеге бар. Төҙөүсе көн һайын ҡуйынына бер кирбес, икмәк бешереүсе - икмәк, һауынсы - һөт, тегеүсе кейем тығып ҡайта ала. Барыбыҙ ҙа урлаша башлаһаҡ, ни була инде? Биш һум урлау ҙа, биш миллион урлау ҙа барыбер бурлыҡ тип атала. Икенсенән, сәйәсмәндәр тарафынан беҙ бик күп кешеләрҙең йән аҫрарлыҡ ҡына килеме булған, шул уҡ ваҡытта айырым кешеләрҙең башҡалар иҫәбенә шашынып байыуы рөхсәт ителгән заманда йәшәйбеҙ икән, ысынлап та, беҙҙең үҙ әҫәрҙәребеҙҙә күрһәтергә теләгән ҡиммәттәребеҙ көлкө генә булып күренәсәк. Хәҙерге ваҡытта хатта юғары уҡыу йорттарында белем алыусы студенттар, уҡып бөткәс, ҡайҙа эшкә урынлашырын белмәй, сөнки эш урындары кәмей. Эшһеҙ кеше нимә эшләй? Урамға сыға һәм енәйәт ҡыла башлай. Тимәк, был юғары уҡыу йорттары үҙ иле өсөн юғары белемле потенциаль енәйәтселәр әҙерләй булып сыға.

▶ **Хәйерселек булған урында иман булмай, тип тә әйтәләр шул. Шулай түгелме?**

**З. БУРАҠАЕВА:** Үҙенде хәҙерге заман ысынбарлығының әхлаҡ сиктәрендә тотоп торор өсөн хәҙер бик ҙур рухи көс талап ителә. Әммә астың асыуы яман, тигән мәҡәл дә бар. Быйылдан Ер йөҙөндә асығыусыларҙың һаны 40 миллион кешегә артасаҡ, тигән прогноздар бар. Был нимә тураһында һөйләй: 40 миллион кешелә агрессия тойғоһо яраласаҡ, тимәк. Был көс бер килеп ҡуҙғалһа, донъяның аҫты-өҫкә киләсәк. Ер йөҙөндә барған финанс көрсөгө - ахырызамандың башы тип тә әйтәләр. Ул иҡтисади көрсөк тип аталһа ла, нигеҙендә рухи көрсөктөң ятыуын аңлауы ауыр түгел. Был көрсөк иң тәүҙә рухиһыҙлыҡ һөҙөмтәһе, урланған буш аҡсаларҙың, өрөп тултырылған доллар ҡыуыҡтарының шартлауы.

**И. МУЛЛАБАЕВ:** Ярар, беҙ ауылда тыуып үҫкәнбеҙ, әхлаҡ тәрбиәһе беренсе урынға ҡуйылған заманда тәрбиәләнеп өлгөрҙөк. Ә балалар һуң, улар асығa башлаһа, ни эшләргә? "Мин иманлы итеп тәрбиәләндем", тип тик кенә ултырырғамы? Яңыраҡ ҡустымдың кәләше Хабаровскиға барып ҡайтты. "Барлыҡ ҡала халҡы урамда, эш юҡ, кешеләр ни эшләргә белмәй, шул тиклем ҡурҡыныс", тип шаҡ ҡатҡан. Барлыҡ ҡала халҡының эш таба алмай урамда йөрөүе криминалдың тәбиғи рәүештә иң юғары нөктәһенә барып етеүе хаҡында ла һөйләй.

Тағы ла ҡиммәттәргә әйләнеп ҡайтһаҡ, ярай әле, беҙ олатайымдан ҡалған фатирҙа йәшәйбеҙ. Ярай әле, ул юлын табып, фатир алып ҡалған. Бер танышымдың иптәше Америкаға эмиграцияға китеп, унда төпләнеп, үҙенең ата-әсәһен янына күсереп алған. Атаһы Совет армияһы сафында һуғышта булған, әсәһе хәрби хирург булып хеҙмәт иткән. Америка беҙҙең ветерандарға ниндәй хөрмәт күрһәткән һуң? АҠШ менән бер союзда торған СССР фашизмға ҡаршы көрәшкән өсөн унда был ветерандарға Америкалағы иң ҡиммәт йорттан бушлай фатир биргәндәр һәм ҡалған ғүмерҙәренә бушлай юғары кимәлдәге медицина хеҙмәте күрһәткәндәр. Беҙҙә йәшәүсе һуғыш ветераны булған олатайҙарға ул саҡта ниндәй ярҙам күрһәтелде һуң? 23 февралдә һәм 9 майҙа бушлай колбаса һәм араҡы таратып бирҙеләр. Бында ла ниндәй ҡиммәттәр хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин инде?

Хәҙерге йәштәргә Бөйөк Ватан һуғышы тураһында һөйләй башлаһаң, битарафлыҡҡа дусар булаһың. Күптәре был һуғыштың ҡасан, ҡайҙа, кем менән кем араһында булғанын да белмәй. Беҙгә иһә балалар баҡсаһынан уҡ "Ленин һәм мейесcе" тигән әҫәрҙе тылҡый башлайҙар ине.

**З. БУРАҠАЕВА:** Ниндәй ҡиммәттәр хаҡында һүҙ алып барырға булалыр, әгәр ҙә беҙ ҡырҡ йәшкә тиклем йәш һаналһаҡ. Йәш һаналыу һәйбәт ул, әммә мин бына һаман да кисәге студент кимәлендәмен. Мин һаман да тупһаларҙан аша үтеп инеп, етәкселәргә төбәлеп: "Бирегеҙ әле миңә эшләргә?", - тием. Миңә: "Көтөп тор, әле бына атҡаҙанған ағай-апайҙарың бар әле...", тип яуап ҡайтаралар. Фатир мәсьәләһе - көтөп тор, эш - көтөп тор, ә мин нисә йәшемә тиклем көтөп торорға тейешмен һуң? Балаларым үҫеп, институттарҙа уҡып, үҙ тормошон ҡорғас ҡына миңә фатир буламы ла, мин яратҡан эшем менән шөғөлләнә башлайыммы?

▶ **Нимә ул фатир? Беҙгә ҡалһа, өй ул - кирбес, һыуға буталған ҡом, цемент һәм арматура ғына. Бына ошо кирбес, ҡом, цемент һыу һәм арматура өсөн кеше ипотека аша ғүмере буйы аслы-туҡлы йәшәп, балаларының ауыҙынан өҙөп алып, ҡом түләүле булып йәшәргә һәм үлеп китергә тейеш. Тимәк, ипотека - ул дәүләттең кешенән ҡол яһау механизмы. Шулай түгелме?**

**З. БУРАҠАЕВА:** Минеңсә, фатирҙың ҡиммәте уның кирбесендә, ҡомонда, цементында, һыуында һәм арматураһында түгелдер, ә эстәге азатлығындалыр. Был - шәхси мөхит һәм унан бер кем дә килеп һине ҡыуалап сығара алмай. Шуға күрә лә беҙ, һеҙ әйткәнсә, төҙөлөш материалдарын түгел, эстәге азатлығын һатып алабыҙ. Фатир - ул бәләкәй генә дәүләт. Шул уҡ ваҡытта дөйөм ятаҡ дәүләт була алмай.



**И. МУЛЛАБАЕВ:** Өй ул - күңел йылылығы, ундай йылылыҡ башҡа бер урында ла булмай. Минең фатирым, панелле булһа ла, минең ҡәлғәм. Мин бәләкәй саҡта йәйҙең яртыһын атайымдың ауылында, ҡалған яртыһын әсәйемдең ауылында үткәргәс, ауыл өйө миңә барыбер ҙә яҡынараҡ.

***Өй ул - күңел йылылығы, ундай йылылыҡ башҡа бер урында ла булмай. Минең фатирым, панелле булһа ла, минең ҡәлғәм. Мин бәләкәй саҡта йәйҙең яртыһын атайымдың ауылында, ҡалған яртыһын әсәйемдең ауылында үткәргәс, ауыл өйө миңә барыбер ҙә яҡынараҡ.***

▶ **Иң төп сценарист, режиссер - ул Аллаһы Тәғәлә. Һеҙ сценарий яҙғанда, спектакль ҡуйғанда төп сценарист һәм төп режиссер менән ниндәй мөнәсәбәттә тораһығыҙ?**

**И. МУЛЛАБАЕВ:** Ҡайһы берәүҙәр шәп пьеса яҙа ла: "Мин яҙҙым да, мин яҙҙым", - тип маҡтана. Кем белә, бәлки, ул әҫәрҙе Аллаһы Тәғәлә бойороғо буйынса яҙғандыр. Ҡайһы бер һап-һау кешеләр бала таба алмай ҙа, муллаға барып аят уҡытһа, таба ла ҡуялар. Ҡыҫҡаһы, беҙ барыбыҙ ҙа Аллаһы Тәғәлә ихтыярында йәшәйбеҙ. Тик беҙ күберәген уның бойорғандарын үтәү урынына, бер ҡиммәттәрҙе лә сағылдырмаған коммерция эше менән шөғөлләнергә мәжбүрбеҙ. Шундай илдә йәшәгәс, ҡалайтаһың инде.

**З. БУРАҠАЕВА:** Ижад кешеһенә башҡаларға ҡарағанда күберәк, ҙурыраҡ һынау бирелә. Сөнки унда донъяны аңлау, ҡабул итеү мөмкинлеге күберәк була. Кешегә һәләтте Хоҙай үҙ халҡына, ырыуына, яҡындарына хеҙмәт иттерер өсөн дә бирә. Тимәк, ул һәләт биргән бәндәһен ошондай хеҙмәте менән дә һынай, яуаплылығын тикшереп ҡарай. Күп осраҡта талантлы кешеләрҙә үҙ-үҙен һаҡлай торған иммунитет, ихтыяр көсө булмай йә бушаҡ була. Былдай осраҡта ошо һәләтле кеше йәшәгән илдең, дәүләттең, милләттең етәкселәре, юлбашсылары талантты иленә, дәүләтенә, милләтенә хеҙмәт иттерер өсөн шарттар тыуҙырырға бурыслы. Тимәк, был осраҡта Аллаһы Тәғәлә ундай етәкселәрҙе лә ошондай яуаплылыҡ менән һынай. Минеңсә, талантлы кеше донъяға тыуған икән, уның өсөн бар кешелек яуаплы.

Спектакль бара. Унда бер ҡатынға һөйәре килгән. Улар аулаҡта һөйөшә, шарап эсә һәм шул ваҡыт ҡатындың ире ҡайтып инә. Был сюжет хәҙерге заман башҡорт драматургияһы материалы була алмай. Был - ғәйбәт кимәлендәге материал, һары матбуғат ҡына яҙа торған ваҡиға. Былдай әҫәрҙәр Аллаһы Тәғәләнән түгел, Иблистән. Миңә күп тапҡырҙар криминалға, эротикаға бәйле сценарийҙар яҙырға тәҡдим итеүселәр булды. Үҙенлең матди хәлендә уйлап, балаларыңды ҡайғыртып, был юлдан да китергә була. Унда аҡсаны ла күп түләйҙәр, сөнки Иблес үҙенең идеологияһын кешеләрҙең аңына үткәреү өсөн аҡса йәлләмәй. Ул юлдан китһәң, кирегә юл да, Юғары аңға ла юл "шап" итеп ябыла.

Барыһы өсөн дә түләргә тура килә, тиҙәр. Донъяла бер нәмә лә бушҡа бирелмәй. Аллаһы Тәғәлә кеше өлөшөнә инеп байыусыларға шундуҡ яҙаһын да бирә. Мең йыл буйына кешеләрҙең ҡылған гонаһы шул тиклем йыйылған, хәҙер ноосфера туп-тулы, ергә лә һеңмәй, кеше берәр гонаһлы ғәмәл ҡылыуы була, күп тә үтмәй, үҙенә әйләнеп тә ҡайта. Экстрасенстар бер-бер артлы аварияға осраусыларға тәүбәгә килергә, күңелдәрен ҡырған кешеләрҙән барып ғәфү үтенергә ҡуша хәҙер.

**Шулай итеп...**

**Зөһрә, Илнур менән ижад мәсьәләләре хаҡында ғына әңгәмәләшергә тип һүҙ башланыҡ та, ниндәй генә тема алһаҡ та, уның осо үҙебеҙ йәшәгән тормошҡа, йәшәйешкә барып ялғанды. Бер яҡтан уйлағанда, был яҡшы күренештер, тием. Сөнки республикала һәм унан ситтә лә исемдәре билдәле булған был ижадсыларыбыҙ йәшәйеш, заман, милләт проблемаларының уртаһында ҡайнай. "Әллә ҡасан уҡ икенсе юлды һайлап, бизнес менән шөғөлләнеп, тик үҙебеҙ өсөн генә лә йәшәй башлаған булыр инек. Тик ошондай заманда халҡыбыҙҙы ҡалдырып китә алмайбыҙ..." - ти Зөһрә. Был уйлап сығарылған йә ҡыланып ҡына әйтелгән һүҙҙәр түгел. Иң мөһиме, ошондай ғәмле ижадсыларыбыҙ барҙа, күңел төшөнкөлөгенә бирелергә түгел беҙгә.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ **_Бәй, быулы бөркәнсектән бер бәндә бар булды бит, быр-р-р-р, башын былай борҙо: Байдәүләтме, бушмы был?! Бибинур бының барлыҡ булмышын барланы._**



БЕР ХӘРЕФ ХИКМӘТЕ

**Гәзитебеҙҙең быйылғы 7-се һанында Баймаҡ ҡалаһынан Әлфиә Юлдашбаеваның "Туратын тапмаған Таһир" тигән тик "т" хәрефенән генә башланған хикәйәһен баҫып, беҙ ошондай мәҙәк хикәйәләр өсөн "Бер хәреф хикмәте" рубрикаһын иғлан иттек. Ошонан һуң аҙ ғына ваҡыт үтһә лә, беҙ бик күп хаттар алдыҡ. Хаттар килеүен дауам итә. Ҡабатлап әйтәбеҙ: бындай рубрикалағы хикәйәләр туған телебеҙ матурлығын, байлығын, уның стилистик мөмкинлеген күрһәтә һәм үҫтерә. Хикәйәләргә талап: улар ҡыҫҡа, ҡыҙыҡлы һәм көтөлмәгән асышҡа ҡоролған оригиналь сюжетлы булһын. Иң мөһиме - һүҙҙән бутҡа бешереү булмаһын.**

## Былбылым



Байбулат бисәһе Бибинур байманлыкта байтаҡ баҫалҡы булды. Башы-бите бөрөшөбөрөк барғанын белмәйенсә, билен биштән быуыр, бер бәләгә бирешмәҫтәй булды бөтмөр Бибинур. Бәй, бик булдыҡлы, бөхтә, барнау байбикә булды бит: баҙарға бара, баҡсала бөксәнләй, бала баға, бейеү берләшмәһендә беренселекте бирмәй. Бурыстарынан бушай биргәс, бирге бүлмәһендә буҙара бешеп, быу борҡотоп, боросло бишбармаҡ, боҫло бутҡа, баланлы бәлеш, бәрәңге билмәне бешерә.

Буҫағаһына бәлә баҫҡас, биреште Бибинур. Бер бөтөрөнгәс, берәгәй болоҡһой был бисә. Бошонҡолоҡ баҫҡанда, бөлөнөп буҙлана бәхете бүҫкәргән Бибинур:

Бөтмөр бикә бейеүсенең
Билкәйҙәре бөгөлә,
Башҡынаһын бәлә баҫҡас,
Бәхетлеләр бөлөнә.

Бибинур баллы балалығын, балиғ булып, Балҡанбаш Байбулатына бисәлеккә барғас, бәхете бөрөләнеүен барланы. Балалары булғас, бәхете бөтмәҫтәй булды Бибиҙең. Байбулаты, биле биртенеп, бәрәкәтһеҙләнеп, барыһына бәхиллек биреп, баҡыйлыҡҡа баҡҡас, Бибинур бөтөнләйгә бөләндә. Бәгере беште бәхетһеҙ бисәнең, бөрөшөп, бәлтерәп бөттө. Бөт-көһөҙ борсолоу бәкәлдәрен бәлкелдәтте, башҡынаһын бәлтерәтте. Быны бүрәнәләрә бөкәлдәргәстән бик бирелеп башҡарылған боронғо башҡорт бәйете Бибинурҙың бөтә булмышын биләне, быуындары бушаны, буҫлығып-быуылып болоҡһоно баһырҡайын...

Башы буталсыҡ, буш бөгөн Бибинурҙың. Бынағайыш, был бисә буталана башланы бит! Биш былтырғы борсағынан буғырлатып бутҡа бешергәйне бая, бушалағайымға булған, буғай... Боғаҙына бутҡа барманы, бәгере болғанды. Бар бешергән-бешекләгәне бушҡа булып, боҙолоп бөтә. Баш бөтөргөс борсолоуҙар бының булмышын баҫты, бошонҡолоҡ бүтәгәнһен бүлтәйтте, башҡынаһын бүлмә бүрәнәләренә бәргеләрҙәй булды бисара бисә... Бүлмәләр буйлап бәргеләнеп, бәлтерәп бөткәс, Бибинур болдорҙан болонға быргылды, болот баҫҡан Борғоса буйына боролдо. Бойоғоп, бөгөрҙәй-бөгөрҙәй барҙы бисараҡай:

Болондарға барма, буран булыр,
Боландарҙы бүре бораллмаҫ.
Бөгөнгөһө бөтөр, булыры булыр,
Бәхеткәйең бары бар булмаҫ.
Баҡсабыҙҙағы баландың
Баландары бешкәндер,
Борсолоуҙар боҙҙар булып,
Буталанып бөткәндер...

Бәй, былай бөтөрөнә-бөлөнә башлаһаң, башың бәләнән бушамаҫ. Бибинур бисәлеккә бармағас, Буҙыҡайҙа бил бөккән буйҙаҡ Байдәүләте бар бит, бергә булырҙар, биғәйбә... Бибинур, бәгерен бимазалаған бәләһенән бушанғандай булып, битен былтайта биреп, болондарҙан боролоп-боролоп барған Борғосаға баҡты.

Бәй, быулы бөркәнсектән бер бәндә бар булды бит, быр-р-р-р, башын былай борҙо: Байдәүләтме, бушмы был?! Бибинур бының барлыҡ булмышын барланы. Бәрәкәт, был Буҙыҡайҙың Байдәүләте - бәгеркәйе бит! Бөтәһе боронғоса булғандай: беше бүрәнәләй баҙыҡ буй, баһадирҙарса бойом бөркөттөңбөркөтө Байдәүләттә булды, башҡа бәндә былай буйсан булмаҫ.

Байдәүләт берҙән-беренә бағып, балауыҙҙай баурмалланды, Бибинурҙы бошонҡолоҡтан бушатыр, бәгеркәйенең былбылдай булмышын балҡытыр бағышламаһын башланы:

Бибинурҡай, бергенәм,
Бәгеркәйем баҫылмай.
Былай булғас, былбылым,
Бергә булмайса булмай...

**Флүрә ИҪӘНҒОЛОВА.**
**... районы.**

## Ҡыуандыҡтың ҡыуанғаны



Ҡыпсаҡтағы Ҡыуандыҡҡа Ҡәҙриә, Ҡыям ҡунаҡҡа ҡайтты. Ҡыуандыҡ ҡарындашының ҡайтҡанына ҡыуанды, ҡосаҡлап ҡыланды. Ҡыуандыҡтың Ҡафияны ҡыш ҡарҙа ҡаҙан ҡайнатҡан, Ҡарайғырҙы ҡороҡлаған ҡыйыу ҡатын. Ҡырпаҡ ҡарғаса ҡырҡлаған ҡаҙ ҡарай. Ҡафия ҡоймағын да ҡойған, ҡарағатын да ҡайнатҡан, ҡунаҡтарына ҡаҙы, ҡабартма ҡуйҙы, ҡымыҙ ҡойҙо, ҡаты ҡоротон да ҡыҙғанманы. Ҡыҫтапмы-ҡыҫтаны Ҡафия ҡунаҡтарын. Ҡыҙ-ҡырҡын Ҡафияның ҡораған ҡорамаһына ҡыҙыҡты.

Ҡунаҡтың ҡыҙыуында Ҡәҙриә Ҡыямын Ҡәйүм ҡоҙаһынан ҡыҙғанып ҡыйналды:

Ҡарамалыла ҡарама,
Ҡарамаға ҡарама.
Ҡара ҡашын ҡыймылдатып,
Ҡарпышыма ҡарама.

Ҡыям ҡыҙарҙы, ҡоҙаларынан ҡыйынһынып ҡыйпысыҡланды. Ҡаранғылағас, Ҡыям Ҡайраҡлыһына ҡасып ҡайтырға ҡарһаланды. Ҡасһа ла ҡоро ҡасмаған, ҡәһәрең, ҡайнағаһы Ҡасимдың ҡамытын ҡулына, Ҡафияның ҡырҡ ҡаҙының ҡап-ҡараһын ҡултығына ҡыҫтырған, ҡабаланып, ҡайынеңгәһенең ҡатаһын ҡуналтаҡ ҡатҡан. Ҡамыт Ҡәйүм ҡыйыш ҡатанан ҡурҡып, ҡолап, ҡолағын ҡанатҡан, ҡатыуын ҡалҡытҡан. Ҡаҫҡан Ҡыямды Ҡәҙриә, Ҡафия Ҡарамалынан, ҡәйнештәре Ҡартсабындан Ҡараталға ҡарай ҡаманылар.

Ҡасим "ҡамыт, ҡамытым...", ҡәйнештәре "ҡыу, ҡыу..", Ҡәҙриә "ҡал, ҡал...", Ҡафия "ҡаҙ, ҡаҙ..", Ҡыуандыҡ "ҡуй, ҡуй...", ҡысҡырҙылар. Ҡыҙыу ҡыпсаҡтар ҡарағайлыҡты, ҡайынлыҡты ҡалдырмай ҡараны. Ҡыҙ-ҡырҡынды ҡурҡытып, ҡуян ҡамышлыҡтан ҡаҫҡас, ҡараһалар, Ҡыям ҡайғырып ҡына ҡаты ҡоротҡа ҡымыҙлыҡ, ҡаҡы ҡушып ҡапҡылай. Ҡафия ҡаҙының ҡуҙҙа ҡыҙҙырылмағанына ҡыуанды. Ҡыям ҡупырыҡ ҡәйнештәренә ҡаршылашты, ҡайрылып ҡаҡшаны. Ҡыҙыулыҡтан ҡылған ҡылығынан ҡыйынһанһа ла, Ҡыям Ҡараталда ҡалманы. Ҡайтҡанда ҡара ҡаҙ ҡаңғылдап ҡаҡшатты.

Ҡыуандыҡ Ҡыямдың ҡайтҡанына ҡыуанды. Ҡыуандыҡтың ҡыуанғанына ҡалғандар ҙа ҡыуанышты.

Ҡарағанат ҡарғалар
Ҡарҡылдаша ҡуймай.
Ҡыуандыҡ та, Ҡыям да
Ҡәҙриәнән ҡурҡмай.
-Ҡуй, ҡаранмағыҙ, ҡорғанды ҡороғоҙ. Ҡәҙерләгәндәрендә ҡәҙерләнеп ҡалайыҡ...

Ҡыпсаҡтарҙың ҡыйналғанын ҡарап ҡаҡшаусы Ҡыҙыҡбикә Ҡыуанғанова исеменән:

**Айһылыу БАЙБАҠТИНА.**
**Йылайыр районы.**

## Байрам



Бура буйындағы бүрәнәлә буласаҡ байрамға бейәләй, башлыҡ, бирсәткә бәйләүсе, берегеннән-береһе былайыраҡ баулдаҡ, бурылдаҡ бисәләр, батҡаҡлыҡта баҫтырышыусы бәләкәй балалар Байсура биләмәһенең бигерәк булдыҡлы, бөтмөр башлығы Бикйәндең бағанаға беркеткән белдереүен байҡарға барып баҫтылар. Белдереүҙә былайыраҡ белешмә баҫылғайны: "Бөгөн беҙҙә Бөгөлгүл быуаһы буйында буласаҡ байрамда биләмәләге барса бәндәләрҙең - балаларҙың, бисәләрҙең, бабайҙарҙың, буйҙаҡтарҙың барыуы бурыс. Байрамда байталдар баҫтырышы, бейек баҡанды буйлау, берешерләп, бишәрләп, бергәләп бейеүҙәр башҡарыу буйынса бәйгеләр буласаҡ. Бәйгеселәргә байтаҡ бүләктәр бүлен-гән, банктың баш бухгалтеры, банкир Бикбаевтың бисәһе Бибигөл - байрамдың бағымсыһы".

- Бәй-бәй, булды былай булғас, бисмиллаһи, барасаҡбыҙ бөтәбеҙ бергәләп байрамға...

Бесәнлегенә бесәнен бушатып, белорусын борғослап булышҡан Бикмәткә бәйләнә башланылар.

- Беше баш Бикмәт, беләһеңме, Бөгөлгүл буйында байрам була. Бәгеркәйең Бибинур биҙәнһен, буянһын, байрамға бергә барығыҙ, бергәләшеп бейерһегеҙ. Бибинурыңдан байрамға бәрәңге бәлеше бешертерһен.

Белә Бикмәт, бәпәйҙән бушанған Бибинуры байрамға баралмаҫын, бишектәге бәпәйҙәре Булат бигерәк бәләкәй бит. Бибинур бер бөртөк балаһына бауырын баҫа, бейеме Бибиәсмә бешәлкәһеҙ бәндә, баланы бәүетмәй, бағышмай. Быларҙың борсаҡтары бешмәй, бар белгәне - бойороу, бауылдап борҡотоу, бирръяҡтағы бикәме Баныуҙарға барыу. Бисәләр, балдыҙ-бикәстәр, бармаҡтарын бөгә-бөгә белгән бешеренеүҙәрен барланылар, бүлештеләр: Баныу - балан бәлеше, Барсынһылыу - бауырһаҡ, буйға бәләкәй Бөртөкбикә - былау, Баҙыян билмән бешерәсәктәр. Биҙрә-биҙрә буҙаларын бидондарға бушаттылар. Байрам булғас, берәгәй булһын!

Башлыҡтары Бикйән баҫыуға барғас, Бөгөлгүл буйында байрам башланды. "Бергәләшеп байрамды башлайыҡ, бер бәләһеҙ, болаһыҙ бөтөрәйектәр!" Башта байтаҡ баҫыу батырҙарын, бесәнселәрҙе бүләкләнеләр. Бүкәнбаш Бәкир буштан-бушҡа башҡаларға бәйләнеп болара, бисәһе, бахырҡай, Бәкиргә батырлыһына, бынлыны бармаҡтарын башында бейетә башлай.

Бер бәхәсһеҙ бирьяҡ бисәләрен быуа буйында бишбармаҡ бешерергә беркеттеләр. Боҫрап бишбармаҡтар беште, баҡырсалар борҡолдай башланы. Байталдар баҫтырышы бәйгеһендә беренселек Батыргәрәйгә булды, бүләккә - башмаҡ, баян биргәс, бәхетле бәйгесе бөтәһен бергә бейетте. Бейек баҡанды бер-береһенә бирешмәйенсә, биш бәйгесе буйланы, беренсе булып баҡанды буйлаған Баязитҡа бәрән бирҙеләр. Баязиттан башҡа бер бала - бинокле, бераүһе бәкеле булды.

Бизнесмендарҙың баҙары бик бай - банан, баклажан, биҙәнгестәрҙән брошка, баҡыр беләҙек-балдаҡтар, бейсболка, бәллүр бокалдар - барыһы бурысҡа бирелдә. Быны бейеүҙәр башланды, байрам бүләге - бер батман бал. Байрамбикә "Бишбармаҡ", Бикә "Бөрләгән"де, балыҡсы Бөрйән "Байыҡ"ты башҡарҙылар. Бер батман бал балыҡсы Бөрйәнгә булды. Биҙәкле балаҫтағылар бергәләшеп бишбармаҡты бөтөрҙөләр, буҙаларҙы бушаттылар, бергәләшеп "Балан"ды буҙланылар. Байрам бағымсыһы Бибигөл Бикбаева барыһын бүләкләнә.

Бындай байрамдар булыуы - барыһын бергә берләштерә, баҙнатһыҙҙарҙы батырайта, бәгерҙәрен байыта.

✓ ***Иç киткес мөғжизәле бит ул туған телебеҙ. Миçалға телселәребеҙҙең бер "йыу" ҡылымы тамырын файҙаланып ҡына утыҙ меңгә яҡын һүҙ формаларын табыу миçалын килтерергә булыр ине.***



# Һөймәгәнгә - һөйкәлмә!



Һаҡмар һыуы һайыҡҡанғамылыр, һыуҙағы һалдарҙың һелкенгәне һиҙелә. Һалҡынса һауала һиллек. Һаҙлыҡта һирәк-һаяҡ һары һандуғастар һайрай. Һыйырҙар һаҡсыһы Һиҙиәт һәм һөмһөҙ Һибәт һаҙлыҡта һәнәк һабы һайлағас, һалҡында һыра һуҡтылар. Һыра - һаулыҡты һура, һуңынан һөйәктәр һыҙлай. Һаҡмарҙа һыулаған һыйырҙар һөҙәккә һибелделәр.

Һыйырҙар һауынға һуңлағас, һуҡмыш Һиҙиәт һыҙғыра-һыҙғыра һайт-һайтлап Һарыбайҙы һөсләткәйне, һауын һыйырҙары һөрлөгөшөп, һуңынан һирәк-һаяҡ һарайға һыпырттылар. Һиҙиәтте һөйләнсек һауынсылар һүгәләр:

- Һин, Һиҙиәт, һыйырҙарҙы һауынға һуңлаттың! Һаҡмарҙа Һибәттең һыраһын һемереп һәлкәүләндең, һиңмайландың, һүлпәнләндең. Һыра һуҡҡас, һылыуҡайҙар һине һанламай. Һарайҙағы һигеҙ һауынсы һөрән һалалар:

- Һарайҙы һепер, һәнәкләп һәр һыйырға һоло һаламы һал!

Һиҙиәт һауынсы һөнәрен һайлаған һыу һөлөгөләй, һөйкөмлө һөйәк Һарысәсте һаман һөйә, һөйөүе һүнмәгән, һүрелмәгән. Һиҙиәт һөйөүҙән һарыларға һабышты. Һыраны һөйгән һәптән Һиҙиәтте Һарысәс һанға һуҡмай, һомғол һынлы һылыуҡай Һарысәстең һөйгәне - һунарсы Һиммәт. Һипкелле һеңлеһе Һәҙиә Һарысәстең һыйырҙарын һауышты һәм һигеҙгә һәммә һауынсы һыйырҙарын һауып, һыпыртты.

* * *

Һабантуйҙағыларҙың һәммәһен һимеҙ һарыҡ һуйып, һалма һоғондороп һыйланылар. Һатыусы Һөйәрбикә һалҡын һуттар, һағыҙҙар һата. Һунарсы Һиммәт һәм Һарысәс һатыусынан һалҡын һут һоранылар. Һөҙөмтәлә, Һиммәт һалҡын һут һалынған һауытты Һарысәскә һуҙҙы һәм һөйөүгә һуҡмаҡ һалынды. Һарысәс - Һиммәттең һуңлаған һөйөүе. Һайлана-һайлана һемәйҙе һонтор һынлы, һаҡалтай Һиммәт. Һайлаған һылыуҡайҙары һунарсының һонтор һынын, һөйләшмәүсәнлеген һанға һуҡманылар.

Һунарсы Һиммәт - Һаҡмар һаҙлығында һеләүһен һунарында. Һунарсы һыҙғырыуға, һеләүһен һаҙлыҡҡа һикереп һыпыртты. Һиҙгер һунарсы һыҙмаһын һелтәнде, һуңынан һеләүһенгә һуҡты һәм һаҙлыҡҡа һуҙып һалды. Һунарҙан һуң Һиммәт һыбайлап Һарысәстәргә һыпыртты. Һөйгәне һуңлағанға Һарысәс һиҫкәнде. Һыланды-һыйпанды, һөрмә һөрттө, һылыуланғас, һөйәк һауыттарға һалҡын һуттар һалды. Һеңлеһе Һәҙиә Һарысәстән һөйөнсө һораны: "Һиммәтең һине һоратасаҡ!"

Һөйөнөсөнән Һарысәс Һиммәткә һыйынды:

- Һаумы, һөйөклөм! Һине һағыныуҙан һарыларға һабыштым. Һөйөүгә һыуһаған Һиммәткә Һарысәсте һөйөү - һулар һауа һымаҡ. - Һунарҙа һыуһаған Һиммәт Һарысәстән һалҡын һыу һораны. Һыуытҡыста һалҡын һыу, һуттар һаҡлана. Һарысәс һөйгәненә һут һалынған һауыт һуҙҙы. Һыуһынға һалҡын һут һәләк һәйбәт. Һуңынан һөйгәненә - һыу, һабын, һөлгө һуҙҙы.

Һарысәстең һыйы - һәйбәт, һөйләшеүе - һөйкөмлө. Һарысәс һауыттарға һуғанлы, һарымһаҡлы һурпаға һалынған һалма һәм һөҙмә һалып һыйланы. Һуғымдар һуйылғас, Һиммәт Һарысәсте һораттырасаҡ. Һөйләшеү һуңында, һаубуллашҡас, һунарсы һөйгәнен һыҡтатып, һырттан Һарытауына һыбай һыпыртты.

# Яҙмышыбыҙҙы яңылыштырмайыҡ!



Яңғыҙаҡтар ятағы янындағы ятҡан ярылған ярҡаларҙы яуыҙлыҡтан яндырған яһил Яҡупты яптылар. Ятаҡты ялмаған ялҡында Яҙгөлдөң яурыны, янбашы янды.

Яйса яуған яҙғы ямғыр янғынды яйлатты. Ян-яҡты яҡтыртып ялағай ялтланы. Ямғырҙа ялтыраған япраҡтар ярышып яңыралар. Яҙгөл яфаланыуҙан ябыҡты, яраларына яра япрағын яҡшылап япты. Яңыраҡ яҡташы Яңғыраубикәнең яуҙырған яңылығынан янған яралары янына яратыу яфалары ярһытты Яҙгөлдө.

- Янбайың, яҡшатланып, Яхъяның ялҡау Ярангөлөнә яҡынлағансы! Янына яҡынлатма, яйлап янып яратыу яфаларынан яҙылырһың. Яраббым, ятраҡан ятыһы Ярангөлгә яҡынлашҡан! Яҙмыштың яңылышыуылыр, Янбай яратмағандыр Яҙгөлдө. Яҙгөл яңғыҙлыҡтан ярҙамсыл, ябай, яғымлы Янбайҙы ярһып яратты, яйлап янына яҡынайтты.

Яҫы яурынлы, ябыҡ яңаҡлы Янбай Яугүл яғындағы ятыуҙа Яҡуптың ярмаһын ярыуға ялланғайны, ярылған ярмаларға ятылаш ярҡаларҙан яйламалар яһай. Ярангөлдөң яһалмалығы яҡынайтҡандыр Янбайҙы янына.

Яҙгөл ятҡа ялынмаясаҡ! Ятышлы, ятраҡан яңы яҫтығында яҫы, ялбыр япмаһын ябынып ятыусы Яҙгөл яйлап яҙылды. Яланбаш, яланаяҡ, яурынына ялтыр яулығын ябынып, Яугүлгә яҡынлашҡанда, Янбай яланда "Ялсығол"до яңғырата. Ябыҡ ябағаһының ялбыр ялдарын яратып яҫҡытҡан Янбай янына яҡынлашты, ялыуын яуҙырҙы:

- Яңыраҡ Яҡуптың Ярангөлөнә яҡынлашҡанһың. Ярангөлдө яратыу яҙыҡ, яңылышлыҡ. Яңынан ярашмаясаҡбыҙ! Яҙмышыма яҙмағас, яҙмағандыр. Ярай, ятраҡаның яҙһын яҙмышыңа. Ялынмаясаҡмын. Ятһам - яҫтығым, ябынһам - япмам ята ятағымда. Янбай ялбарып Яҙгөлгә ялынды: Ярарҙың яғы ябылмағандай, ябалаҡ Яңғыраубикә яңылышҡан, яла яҡмаһын, ятраҡан ятрым Яҙгөлөм янымда, Ярангөлдө Яҡуп ярата. Яңыраҡ Яңғыраубикә яратыуын яҙғайны, яуап яҙмағанға ялғанлаған. Яҙмышыбыҙҙы яңылыштырмайыҡ. Ялымда яусылатырмын. Янбайҙың ялбарып ялыныуынан Яҙгөл яҙылды, ятраҡанына "Ярар" яуабы яуҙырып, яйлап яңғыҙаҡтар ятағына яҡынлашты.

**Фәниә ШӘЙӘХМӘТОВА.**
**Баймаҡ районы**
**Байыш ауылы.**

## ЯҢЫ РУБРИКА ТӘҠДИМ ИТӘМ

**Гәзиттең тематикаһын киңәйтеү, тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ, байыраҡ йөкмәткеле итеү маҡсатында "Яңы рубрика тәҡдим итәм" сараһын ойошторорға булдыҡ. Гәзит битендә үҙе теләгән теманы күрергә теләүсе уҡыусыбыҙ рубриканың исемен атарға, уның актуаллеген, мөһимлеген раҫларға һәм шуға ярашлы үҙенең мәҡәләһен тәҡдим итергә тейеш. Яңы рубрика тәҡдим итеүсе үҙенең фотоһүрәтен ебәрһә лә яҡшы булыр ине. Өлгө өсөн журналисыбыҙ Әхмәр ҮТӘБАЙ "Тел хикмәттәре" рубрикаһы һәм ҡыҫҡа ғына мәҡәлә тәҡдим итә.**

*ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ*




**Гәзитебеҙҙә телгә бәйле "Тел төбө - хазина", "Телебеҙ ынйылары", "Әсәйем лөғәте" тигән рубрикалар аҫтында баҫылған мәҡәләләр күптән инде уҡыусыларыбыҙ тарафынан яратып ҡабул ителә.**

"Тел хикмәттәре" рубрикаһындағы мәҡәләләр үҙебеҙҙең башҡорт теленең, башҡа телдәрҙең, шулай уҡ телебеҙҙең башҡа телдәр менән сағыштырмаса мөнәсәбәтендә күҙәтелгән ҡыҙыҡлы күренештәр, хикмәттәр хаҡында булыр, тип уйлайбыҙ. Иç киткес мөғжизәле бит ул туған телебеҙ. Беҙ уның эске мөмкинлектәре хаҡында барыһын да белеп бөтәбеҙме икән? Миçалға телселәребеҙҙең бер "йыу" ҡылымы тамырын файҙаланып ҡына утыҙ меңгә яҡын һүҙ формаларын табыу миçалын килтерергә булыр ине. Шул уҡ ваҡытта беҙ бөйөк рус шағиры Александр Пушкиндың әүҙем һүҙ запасының илле мең генә һүҙҙән тороуын беләбеҙ.

Беҙ, мәҡәләнең исеменән күренеүенсә, Ишембай ҡалаһының Маҡар яғында икәнен беләбеҙ, ә бына кемдеңдер ише йәғни һөйгәне Баймаҡ аръяғында икәнен белмәй инек әле. Ижектәрҙең араһындағы паузаларҙы төрлөсә үҙгәртеү юлы менән бында бөтөнләй икенсе мәғәнәләге һүҙбәйләнеш килеп сыҡҡан. Телебеҙҙә бындай мөғжизәләр бихисап. Ике йыл элек бер генә һүҙҙән торған шиғыр яҙғайным. Әйтергә кәрәк, ул шиғырҙың исеме өс һүҙҙән тора. Матбуғатта тәүге тапҡыр баҫыла ул шиғыр:

**Башҡортса-урыҫса шиғыр**

Ғүмер
умер
ер...

Икенсе бер шиғырым "Урланған Урал" тип атала. Ул шиғырҙы ла һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәм. Унда мин һүҙбәйләнештәге ижектәр һаны ҡыҫҡара барыу принцибын һайланым. Был шиғырым китабымда баҫылғаны бар. Уны гәзит уҡыусыларына ла тәҡдим итәм:

**Урланған Урал**

Уралып ятҡан Уралым,
алып ятҡан Уралым,
лып ятҡан Уралым,
ятҡан Уралым,
ҡан Уралым,
Уралым,
ым,
м

Күккә ашҡан түбәләре -
Уралып ятҡан Уралым;
Ҡосағына башҡорт илен
Алып ятҡан Уралым;
Батырҙары ҡуйынына
Лып ятҡан Уралым;
Яу килгәндә ҡалҡан булып
Ятҡан Уралым;
Талҡайыңды ҡырҡып алһам -
Ҡан Уралым;
Уралым;
ым;
м;
.

Телебеҙҙең башҡа телдәр менән бәйле этимологияһына бер миçал. Урыҫтар бер ваҡыттта ла "У меня сын есть", тимәй, "У меня сын растет", тиҙәр. Ни өсөн? Сөнки уларҙың телендә ул булған кешенең "үҫеү" мәғәнәһенә бәйле булыуы билдәләнә. Беҙҙең телдә "үҫемлек" һәм "үҫенте" тигән һүҙҙәр бар. "Үҫенте"нең "үҫен" өлөшөндәге "ҫен" өлөшө шул уҡ урыҫ телендәге "сын"ды аңлата бит. Тимәк, урыҫтар үҫеүсе кешене ул тип әйтә булып сыға. Әйтергә кәрәк, урыҫ теле менән туған телебеҙҙе бәйләгән ана шундай мендәрсә-мендәрсә миçал килтерергә булыр ине.

Тағы ла бер миçал килтерәйек тә, һүҙебеҙҙе туҡтатып торайыҡ. Кемегеҙ әйтер, башҡорт телендәге иң күп хәрефтән торған һүҙ ниндәй ул? Мин әлегә 38 хәрефтән торғанын беләм. Ул һүҙ - махсуслаштырыңҡыламағанлыҡтарынанмылыр. Был һүҙҙе урыҫ теленә тәржемә итер өсөн тотош һөйләм кәрәк булыр ине. Тәржемәһе: пока еще вроде бы не до конца специализировали.



Йә, кемегеҙ тағы ла күберәк хәрефтән торған һүҙ килтерә алыр?

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҮПКӘ СИРЕ...

## яман ҡотора бит

**Экспертар фекере буйынса, беҙҙә яҡын арала туберкулез менән ауырыусылар һаны әлегә ҡарағанда бер нисә тапҡыр артығыраҡ буласаҡ. Иҡтисад көрсөгө Рәсәйҙе туберкулез эпидемияһына алып киләсәк, тигән хәбәрҙәр ҙә йөрөй. Республикабыҙҙа иһә был йәһәттән хәл тыныс һәм тотороҡло тип әйтергә була, әллә ни киҫкен үҙгәрештәр юҡ. Рәсәй буйынса йыл һайын 100 мең кешегә 83 сир осрағы тура килһә, Башҡортостанда был күрһәткес 49-ға тиң.**

- Туберкулез бик ҡатмарлы һәм ауыр сирҙәрҙең береһе, - ти “Роспотребнадзор”ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһенең урынбаҫары Нәсимә Күсимова. - Беҙҙең республикала ғына ла был сир йыл һайын 400-ҙән ашыу кеше ғүмерен ҡыя. Былтыр, мәҫәлән, Башҡортостанда 427 кеше туберкулездан үлде.

Был ауырыуҙың иң төп үҙенсәлектәренең береһе - уның кеше йәшәгән социаль шарттарға бәйле булыуы. Насар туҡланыу, ҡыҫынҡылыҡ, тынсыулыҡ, дымлылыҡ һәм бәләкәй майҙанлы бүлмәлә күмәк кеше йәшәүе кеүек шарттар аҙ тәьмин ителгән ҡатлам вәкилдәренең ошо сирҙе йоҡтороу ихтималлығын арттыра ғына. Быларға тағы ла тәмәке тартыу, эсеү, стресс һәм социаль яйһыҙлыҡтың башҡа төр эҙемтәләрен дә өҫтәһәң, туберкулез йоҡтороуға күп тә ҡалмаясаҡ.

- 1999 йылға тиклем беҙ туберкулез менән сирләүселәр күрһәткестәрен кәметеүгә өлгәшкәйнек, - тип һөйләй Туберкулезға ҡаршы республика диспансерының баш табибы Миңленур Азаматова. - Үкенескә ҡаршы, 2002 йылдан алып яҡшы күрһәткестәр менән маҡтана алмайбыҙ.

Туберкулезды дауалау бик ҡиммәткә төшә һәм оҙаҡҡа һуҙыла, тип дауам итә М. Азаматова. Быйыл инфляцияны иҫәпкә алып, ауырыуҙарҙы медикаменттар менән тәьмин итеү һәм туҡланыуға бүленгән аҡса күләме 20 процентҡа арттырылды. Бер кешене дауалау өсөн 30-50 мең һум аҡса тотонола.

Бөтә донъя туберкулезға ҡаршы көрәш көнөн быйыл Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы "Туберкулезды туҡтатырға!" тигән девиз менән үткәрҙе. Сирҙе туҡтатыуға өлгәшеп булырмы - әйтеүе ҡыйын, сөнки Рәсәйҙең баш фтизиатры Михаил Перельмандың, 2008 йылға туберкулез менән ауырыған кешеләр өсөн федераль бюджет буйынса дарыуҙар һатып алынманы, тигән һүҙҙәре хафаға һала. Әле бына бер нисә көн элек кенә Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы 2008 йылдың препараттарын һатып алыу буйынса аукцион иғлан итте, ә 2009 йыл өсөн шундай уҡ дарыуҙар һатып алыу хаҡында әлегә һүҙ ҙә юҡ.

Республика былтыр СПИД, туберкулез һәм малярияға ҡаршы көрәш буйынса глобаль фондтан ҡайһы бер ҡорамалдар һәм препараттар алды. Беҙгә шулай уҡ лаборатория ҡорамалдары ҡайтарылды, улар менән Башҡортостандың 11 дауалау учреждениеһы йыһазландырылды. Халыҡ-ара үҫеш банкы ла беҙгә ярҙам ҡулы һуҙҙы: 13 миллион һум аҡса бүлде, тип тамамлай һүҙен баш табип М. Азаматова.

Республикабыҙҙағы бөтә балалар ҙа туберкулезға диагностика үткән. Әлеге ваҡытта 13 мең бала махсус иҫәптә тора. Улар араһында ауырыуҙарға ҡарағанда теге йәки был сәбәп менән Манту пробаһы насар булған балалар күп. Үҫмерҙәр менән дә хәл насарҙан түгел.

- Белеүегеҙсә, туберкулез менән кешеләр генә түгел, ә хайуандар һәм ҡоштар ҙа ауырый, - ти “Роспотребнадзор” идаралығы етәксеһе урынбаҫары Н. Күсимова. - Был йәһәттән шуны билдәләп китер инем: һуңғы ете-һигеҙ йыл эсендә һыйыр малдары һәм йорт ҡоштары араһында туберкулез сире бер генә тапҡыр ҙа теркәлмәне. Былтыр ғына әле өс миллионлап баш мал тикшерелде, әлегә хәл насарҙан түгел.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**Бынан бер-нисә ай элек тыуған яғымда, Ырымбур өлкәһе Красногвардеец районында булырға тура килде. Ҡайтыу форсаты һирәк тәтей. Һәр ҡайтҡанымда үҙгәрештәр, яңылыҡтарҙы йотлоғоп күҙәтәм, тыңлайым, ҡайһы берҙә сағыштырам да.**

# ХАТ ЯҘЫШЫУҘЫ ОНОТОУ...

## туған телдәге телмәрҙе лә оноттора түгелме?

Алты йәшем тулғанда ғаиләбеҙ менән Башҡортостандың Ғафури районына күсеп килеп йәшәй башланыҡ. Алтынсы-етенсе кластарҙа уҡығанда уҡытыу рус телендә алып барыла башланы. Башҡорт ауылы балалары өсөн бындай хәлдең күпме ҡыйынлыҡтар тыуҙырыуын үҙ башынан үткәргәндәр генә аңлар. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңламағанға күрә темаларҙы үҙләштереү ауырға тура килде. Мин етенсе класты тамамлаған йәйҙә тыуған яҡҡа ҡайтып йәшәнек, унан һуң, балаларҙы уҡытырға кәрәк, тигән һылтау менән атайым ғаиләне Өфө ҡалаһына күсереп алып килде. Был етди сәбәп, шулай ҙа уны башҡорт мөхите тартҡандыр, тип уйлайым, һәр хәлдә, Өфөлә булған һайын ул дуҫтары менән осрашып-әңгәмәләшеп ултыра ла, бик дәртләнеп ҡайта ине.

Төрлө ерҙә йәшәгәнгәлерме, төрлө һөйләште ишетеп, аралашып үҫкәнгәме, телгә ҡыҙыҡһыныу көсәйә барҙы. Туҡ йылғаһы буйында йәшәүсе әбейемдәрҙең һөйләшен һаман да һағынам. Ике туған апай-ағайҙарым, туғандарым үҙ телендә беҙҙең кеүек үк тиерлек һөйләшә лә бит, тик уларҙа рус һүҙҙәрен күберәк ҡыҫтыралар, ә балалары туған телде бөтөнләй белмәй.

Бергә йыйылышып, табын артында ултырғанда башҡортса һөйләшеүемде тыңлап, күҙҙәре янып-осҡонланып китә. Шуны күреп, йөрәк һулҡылдап ҡуя. Матур китаптар алып ҡайтып, балаларын ҡыҙыҡһындырып китеүем дә ваҡытлыса ғына - әлеге шул мөхит... Туҡ, Соран йылғалары буйында урынлашҡан башҡорт ауылдарында хәҙер инде туған телде башланғыс кластарҙа ғына өйрәнәләр, ә ҡайһы бер мәктәптәрҙә хәҙер уҡытыусылар ҙа юҡ. Инде булғандары ла хаҡлы ялға сығып бөткән.

Атайымдың тыуған йортонда ике туған ҡустым менән фотолар ҡарап ултырғанда альбом араһынан һарғайып бөткән, ләкин матур һаҡланған хаттар килеп сыҡты. Береһен Фәтих Бәхтейәров, икенсеһен Вәхит Бәхтейәров яҙған. 1965-1967 йылдарҙа яҙылған был хаттарҙы ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡтым. Эстәлегенә, каллиграфияларына хайран ҡалдым. Ә бит ул егеттәр ни бары унынсы класты тамамлап, армияла булғандар ҙа, уҡыуҙарын артабан дауам да итмәгәндәр. Хаттарҙа бер генә лә урыҫ һүҙе юҡ, тиһәң дә була. Бына береһенең башы: "Һаумыһың, ҡәҙерле апай! Күңелемдә булған ялҡынлы гүзәл сәләмдәремде һин, ҡәҙерле апайыма, бүләк иткәндең һуңында алдағы тормошонда ҙур уңышлыҡтарға, аҡ бәхеттәргә ирешеүеңде теләп хат яҙа бергә иркәләп үҫкән туғаның Вәхит".



Был хаттарҙы уҡығандан һуң башҡа төрлө уйҙар килде. Ул заманда уҡытыу методикаһы күпкә ябай булған, әлбиттә. Әммә ябай ғаиләләге уҡыусының - уҡыу тигән, ә уҡытыусының уҡытыу төшөнсәһенә ҡарата иҫ киткес ихтирамлы булыуы(!) ана шул әлеге лә баяғы ябайлыҡта - бөйөклөктә түгелме икән? Ошо ябай, әммә иҫ киткес матур, яғымлы, йөкмәткеле хатта авторҙың ни тиклем бай зауыҡлы күңеле, үҙ телен тәрәндән һәм бөтә нескәлектәрендә белеүе һоҡландыра. Хәҙер бик һирәк йәки бөтөнләй ҡулланмаған һүҙҙәр ҙә бар был хатта: ифрат, кәйеф, рәүешле, ҡәҙерле, тараф, әүәлгесә һ.б. Ни бары илле йыл тирәһе үткән. Был егеттәр әле уҡытыу башҡорт телендә алып барылған осорҙа уҡыған. Нәҡ шул йылдарҙа бөтә фәндәрҙе урыҫ телендә уҡытыуға күсергәндәр ҙә инде...

Мәктәптәрҙә программаларҙы ла үтә ҡатмарлаштырыу бумеранг кеүек тәьҫир итә. Хәҙерге заман уҡытыусыһына талаптар кәрәккәндән артыҡ ҡуйыла. Уҡыусы балаларҙың да ваҡыттары үткән быуаттың 50-60-сы йылдарҙағы балаларҙыҡы кеүек түгел. Заман башҡа, заң башҡа, тигәндәй, образлы фекерләү, хис-тойғоларға бирелеп китап уҡыу йәки уйнау урынына күпселеге ата-әсәһенән күреп, телевизорға текләп ултыра. Компьютерҙары булғандары мәктәптә үк, өйгә ҡайтыу менән ниндәй уйынды уйнарға, тип хыяллана.

Кей-Кавустың улы Гиланшаһҡа нәсихәттәр китабында ("Ҡабус-намэ") шундай юлдар бар: "Кеше хайуандарҙан шул яғы менән айырыла - уның тәнендә ун төрлө тойоу (бишәүһе -тыштан, бишәүһе - эстән) бар. Тышҡы тойоуҙың бишәүһенә ишетеү, күреү, һиҙеү, тойоу һәм тән ҡарай. Эске тойғоларға фекерләү, хәтер, хыял, әйберҙәрҙе, күренештәрҙе береһен икенсеһенән айыра белеү, телмәр инә". Телмәргә өйрән, сәсән бул, тигән нәсихәт беҙгә лә төбәп әйтелгән кеүек.

Һуңғы йылдарҙа фекерләүебеҙгә һәм телмәребеҙгә урыҫ теле генә ҡурҡыныс янай, тиһәк, хата булыр. Үткәнде йәки юғалтыуҙарыбыҙҙы кире ҡайтарып булмай, беҙгә әлегеһе һәм ҡалғаны ҡиммәт. Баш ҡалабыҙҙа балаларын бынамын тигән итеп үҙ телендә һөйләшеп үҫтереүгә өлгәшә алған ғаиләләр йәшәүен күреү генә лә ниндәй ҙур ҡыуаныс! Булғанын һаҡларға тырышайыҡ.

Бынан бер нисә йыл элек район үҙәгендәге балалар баҡсаларының өлкән төркөмдәрендә тәстикләү үткәргәндә "Ата-әсәйҙәрегеҙ менән кистәрен ял көндәрендә ваҡытты нисек үткәрәһегеҙ?" тигән һорауға 92(!) процент "Телевизор ҡарайбыҙ" тип яуаплағайны. Йәмәғәт! Аҙнаға 3 кенә кисте балаларығыҙ менән китап уҡыуға бүлһәгеҙ, тормошоғоҙ күпкә ҡыҙыҡлыраҡ булыуын бермә-бер тойор инегеҙ, балаларығыҙ ниндәй ҡәнәғәт булыр ине лә, рухтары нисегерәк байыр ине!.. Ҡыҙғаныс, әммә факт: яуап биреүсе балаларҙың күбеһенең ата-әсәһе - юғары белемле... Мин баяғы хат авторҙары һәм уларҙың фекерләүе менән замандаштарыбыҙҙың телмәргә, образлы уй-фекер йөрөтөүгә оҫталығы араһында ниндәйҙер параллелдәр табып булмаймы икән, тим.

**Сәриә ИШЕМҒОЛОВА.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ҠУРАЙЛЫ ЙОРТТА...

## рухлы булып үҫтем

**Бала сағым ҡурай моңдарына сорналып үтте, тиһәм, һис тә ялған булмаҫ. Үҙемде иҫләгәндән алып, атайым ҡурайҙа уйнаны.**

Өй тултырып, моң ағыла... "Буранбай", "Азамат", "Абдрахман"... Бәләкәй саҡта уларҙың илаһилығын, серлелеген аңлап та етмәгәнмендер, тик был моң күңелгә һеңгән. Улар үҙ эҙен ҡалдырмай үтмәгәндер. Башҡорттоң рухын, һылышын һеңдерергә, уларҙы аңларға ярҙам иткәндер. Сөнки ҡурайҡайыбыҙ халыҡтың көнитмешен, мәҙәниәтен, рухи хазинаһын сағылдыра, милләттең үткисерештәрен, өмөт-ышаныстарын, башынан үткәргәнен яңғырата кеүек. Бигерәк тә ир-егеттең серҙәше кеүек күрәм мин уны. Хис-тойғолары урғылып ташҡанда, хәсрәтләнгәндә, шатланғанда, күңеле тулғанда ул шул серҙәшенә атлыға кеүек, башҡаларға һөйләй алмағанды, уға бәйән итә һымаҡ.

Атайымдың тыуған яҡтарына ҡайтып, ошо тылсымлы музыка ҡоралында һыҙҙырып уйнауын ауылдаштары, бигерәк тә күрше инәй һағынып көтөп ала. Ул әле булһа шулай тип иҫкә ала: "Утьяҡҡыстан үҙәк өҙҙөргөс, сихри ҡурай моңо ишетелһә, улым ҡайтҡан икән, тип беләм. Яҡынырак килләм дә, уйнап бөткәнсе тыңлап торам. Уйҙар менән әллә ҡайҙарға осоп китәм... Күҙгә йәштәр төйөлә". Атай йортона, уны уратып алған мәғрүр тауҙарға, шаулы урмандарға, "бәләкәй Ватан" тигән изге төшөнсәгә булған һөйөүен шулай моң аша еткерә атайым. Ул йортта ҡурайҙың үҙенең махсус урыны ла бар. Түбә таҡтаһына ике ҡаҙау ҡаҡерәйтеп ҡағылған, шуның өҫтөнә йәтеш кенә менеп ята ҡурайҡай.

Башланғыс кластарҙа үҙем дә уйнай торғайным. Беренсе көйөм "Бөрлөгән" ине. Конкурста ҡатнашҡаным иҫтә: малайҙар араһында бер үҙем. "Азаматты" һыҙғыртып, Сәйфулла Дилмөхәмәтов ҡулынан махсус бүләк - исемле ҡурай алдым шулай.

Һуңғы ваҡытта күңелем йәнә тартыла шул сихрилыҡҡа. Шул тиклем боронғо башҡорт халыҡ йырҙарын, уларҙың ҡурайҙа яңғырашын тыңлағы, тарихын танығы, нескәлектәренә төшөнгө килә. Ҡурай моңо яҙылған компакт-дисктарҙы йыш тыңлайым. Тик был көйҙәрҙе тыңлар өсөн дә айырым ваҡыт кәрәк шул, эш ыңғайында ғына тыңлап булмай был моңдо. Бар иғтибарыңды ҡурай моңона йүнәлтеп, тәрән тынлыҡта, йән тынысылығында, уй-фекерҙәреңде туплап ҡына тотонаһың был "эшкә". Һәм таҡыя баш ҡурайҡай сығарған моң һинең һәр күҙәнәгеңә үтеп инә, йөрәгеңде әллә күпме хис-тойғолар менән һуғара. Музыка ҡоралының кешеләшундай тойғолар, кисерештәр барлыҡҡа килтерерлек көскә эйә булыуы - үҙе бер мөғжизә. Тыуған илемә, халҡыма, хозур тәбиғәтебеҙгә булған һөйөү тап ҡурай моңдары аша яралды бит миндә.

**Шулай итеп, милли рухта тәрбиәләргә һәләтле булған, быуындар араһындағы бәйләнешне һаҡлап килгән, ата-әсәләр аманатын еткергән был музыка ҡоралының Башҡортостандың ете мөғжизәһенең береһе булырға тулы хоҡуғы бар, тип иҫәпләйем. Хатта ки сәскәһенең ете тармағының һәр береһе үҙе бер мөғжизәгә торорлоҡ.**

**Ҡарлуғас РАФИҠОВА.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**"Киске Өфө" гәзите"Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Сәләм" ижад берекмәһе менән берлектә иглан иткән "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсы дауам итә.**

**Конкурс өс этапта үткәреләсәк. Иң тәүҙә (июнь аҙағына тиклем) Башҡортостаныбыҙҙағы мөғжизә булырҙай бар нәмәне - тәбиғәт объекттарын, тарихи, мәҙәни, сәнғәт әйберҙәрен барлап сығайыҡ. Һәр кем үҙе тәҡдим иткән объект тураһында һүҙ әйтә, уны яҡлай, тауыш бирә. Тауыш биреү хаттар аша ла, редакция телефоны - 252-39-99, 246-03-24, "Сәләм" ижад берекмәһе телефоны - 251-73-91, 251-90-44, шулай уҡ "Сәләм" ижад берекмәһе сайты - www.Saljam.ru аша ла атҡарыла.**

**Икенсе этапта тәҡдим ителгән объекттар араһынан 14-е һайлап алына һәм артабан тауыш биреү дауам иттереләсәк. Был этаптың нисегерәк башҡарыласағын һуңыраҡ хәбәр итербеҙ.**

**"Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында Башҡортостаныбыҙ өсөн визит карточкаһы булырҙай, уны доньяла танытырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи объекттар ҡатнашырға тейеш. Һеҙҙән хаттар, мәҡәләләр көтәбеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ



# БӘХЕТЛЕ ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

## Ысын атай-әсәй булыр өсөн, ысын кеше булырға кәрәк

Джулиан баҡса уртаһына юлланды. Ул ҡулдарын өскә табан йәйеп ебәрҙе, әйтерһең дә, күктән әле генә үҙе миңә бүләк иткән Ғаләм мөхәббәтен һәм аҡылын көтә ине. Уның ҡулдары юғарыға күтәрелеүе булды, күк йөҙө яҡтырып киткәндәй булды.

- Һин күрҙеңме? - тип, миңә ҡарай боролоп, ҡыҫҡырып ебәрҙе.

- Башҡа һыймаҫлыҡ хәл бит был! Нимә булды ул?

- Белмәйем, - тине Джулиан. - Әммә был мин һиңә бөгөн иртәнсәк әйтергә теләгәндең тап үҙе.

- Һәм нимә инде ул?

- Нур бул! Балаларың өсөн нур бул. Уларға юл күрһәт. Джондың тормошонда яҡтыртыусы нур бул. Был донъяны яҡшыраҡ, аҡыллыраҡ һәм тыныраҡ итеүсе нур бул. Мин бирған һабаҡтарҙы үҙләштерергә тырыш. Һинә кем булырға яҙһа, шундай кеше бул. Бөгөндән алып, нимә генә эшләһәң дә, үҙеңдә булған яҡшыны ғына күрһәтергә тырыш. Был донъяға бар булмышыңды бир. Ҡайҙа ҡараңғылыҡ күрһәң, барыһын да яҡтырт. Юлдан тайпылғандарға маяҡ булып тор. Был донъяны яратыусы йөрәк һәм рух байлығы ғына ҡотҡара алыуын онотма.

Ошо һүҙҙәр менән Джулиан ергә сүгәләп, уны ҡулы менән соҡой башланы. Тәрәнерәк ҡаҙған һайын, йөҙөндә эшенә тулыһынса бирелгәнлек сағыла ине. Бер нисә минут тырыш хеҙмәттән һуң Джулиан туҡтаны. Ҡаҙған соҡоронан миңә быҒаса таныш булмаған әйбер килтереп сығарҙы. Был 12 сантиметр оҙонлоғондағы таштан соҡоп яһалған әйбер ине. Яҡыныраҡ ҡарағандан һуң уның юғарыға ҡулын һоноп тороусы кешене кәүҙәләндереүсе статуэтка булыуын аңланым.

- Нимә ул? - тип, мин йөрәкһеп һораным.

- Был Инукшук. Арктикала йәшәүсе ҡәбилә кешеһе. Белеүеүебеҙсә, ул кеше йәшәмәгән урындарҙың береһе. Әммә был урын тарихы шулай уҡ кешеләр нисек итеп йәшәргә тейешлегенә миҫал булып тора ала. Инуиттар, йәғни эскимостар, риүәйәте буйынса Инукшук юлсыларға тормош сәйәхәттәрендә аҙашмаҫ өсөн юл күрһәтеүсе булып тора. Был кешеләр юлдан тайпылмаһын өсөн уларҙың юлын яҡтыртырға бурыслы булыуыбыҙ хаҡында белгертеүсе символ булып тора. Кеше һынын кәүҙәләндереүсе был таш фигуралар бик күп быуаттар ағымында Арктиканың боҙ кинлектәренә килергә ҡыйыулыҡ тапҡан юлсыларға дөрөҫ юл күрһәтеп, оҙатып ҡалған. Һин дә, һеңлем, тиҙҙән ғаиләңде, шулай уҡ бөтәндәрҙе аҡыллыраҡ тормошҡа алып барыусы лидер, оҙатыусы булаҫаҡһың. Ҡасандыр мин һиңә ошо һүҙҙәрҙе әйтеремде белә инем. Һиндостандан ҡайтҡас, был бүләкте кәрәкле мәлдә тапшырырға ҡарар иткәйнем. Һуңғы минутка тиклем ул мәлдең ҡасан булырын да белмәгәйнем. Мин хатта уның ҡайҙа ятыуын да онотҡайным. Әммә йөрәгемдә тыңлап, эҙләгән урынымдан таптым.

Ағайымдың ҡулынан статуэтканы алғас, унда ниндәйҙер һүҙҙәр яҙылыуын күрҙем. Барлығы дүрт һүҙ яҙылғайны: "Тормошҡа ҡарата иғтибарлы бул". Ошо ваҡыт Джулиандың бүлмәһе түбәһендә яҙылып ҡуйылған Генри Миллерҙың һүҙҙәре иҫкә төштө: "Әгәр бәләкәй генә үләнгә текләп ҡараһаң, хатта ул да һинең алдыңа ниндәйҙер серле, тулҡынландырғыс һәм иҫ киткес күркәм донъя булып баҫыр".

**Робин ШАРМА.**

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Эште ҡалдырыу - ваҡыт буры

Филадельфияла эште көндән көнгә ҡалдырыусылар клубы бар. Йылына бишәр доллар индереп, һин уның ағзаһы була алаһың. Клуб сығарған баҫма "Үткән айға бюллетень" тип атала. Улар 1812 йыл һуғышына ҡаршы сығыш яһай, Азатлыҡ ҡыңғырауының сатнаған урындарын бөтәштереү өсөн уны уйлап сығарыусылар менән бәйләнешкә инеп ҡарай һәм хатта Американы асыу өсөн өс кораблек аҡса йыйырға тип, Испанияға бара!

Бәлки, быға юмор ҙа һалынғандыр, әммә тормошта бер көндөң эшен икенсе көнгә ҡалдырыу емергес ғәҙәткә әүерелеүе ихтимал. Ваҡытты файҙалана белеү үҫә барыу менән үҙләштерелгән һәләт ул. Сабыйҙар һәм бәләкәй балалар ғына бөгөнгө көн менән йәшәй. Улар киләсәктә тағы ла күберәк тәжрибәгә эйә булыр өсөн әлегә бөгөнгө көндө һеҙәмтәле итеп ҡулланырға өйрәнмәгән. Бөгөнгө көн менән ҡәнәғәтләнеүҙән туҡтау һинән ҙур тәртип талап итә.

Үҫә барған һайын беҙ ваҡыт менән идара итергә өйрәнәбеҙ: кисен телевизорҙан тапшырыуҙар ҡарай алыр өсөн йорт эштәрен алдан эшләп ҡуябыҙ; эш көнөн бер аҙ ҡыҫҡартып, магазинға юлланабыҙ. Ваҡытты дөрөҫ файҙаланыу аҡыл туплау билдәһе булып тора һәм үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәтлеккә, мөһим маҡсаттарға өлгәшеүгә алып килә. Сиңерткә менән ҡырмыҫҡа тураһындағы мәҫәлде хәтерәнә төшөр әле. Сиңерткә йәй буйы ырғып-һикереп уйнай, йырлай, бейей, ә уның иптәше ҡырмыҫҡа ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ әҙерләү өсөн көн-төн тир түгә. Ҡырмыҫҡа уға ҡыш етеүен әленән-әле иҫенә төшөрөп торһа ла, сиңерткә төп эште иртәгә ҡалдыра килә. "Бының өсөн ваҡыт күп әле, ә хәҙергә минең уйнағым һәм күңел асҡым килә!" тип әйтә ул. Көтмәгәндә ҡар яуа һәм ҡырмыҫҡа үҙенең ышанысլы йылы иләүенә инеп урынлаша, ә сиңерткә аҙыҡһыҙ һәм ышыҡһыҙ ҡалып, һыуыҡта һәләк була.

Был боронғо мәҫәл беҙгә һабаҡ булып тора. Ҡырмыҫҡа йәки сиңерткә булыу - беҙҙең ҡарамаҡта. Әлбиттә, йырлап-бейеп, тормоштан кинәнес алып йәшәү яҡшы, әммә беҙ мөһим бурыстарыбыҙҙы ситкә ҡуйып торорға тейеш түгелбеҙ. Ваҡыт - ул беҙҙең иң ҡиммәтле тауарыбыҙ. Был бер ваҡытта ла һаҡлап та, һатып алып та йәки ҡайтанан талап итеп тә булмай торған берҙән-бер әйбер. Беҙ йыш ҡына уны бер хәсрәтһеҙ әрәм-шәрәм итәбеҙ ҙә, һуңынан был турала ҡайғырабыҙ. Киләсәк йәки үткәндәр менән йәшәү ышанысլы түгел. Бөгөнгө көндән башҡа бүтән төрлө ысынбарлыҡ юҡ, әгәр һин был ваҡытты буштан-бушҡа уҙғараһың икән, уны башҡаса ҡайтара алмаясаҡһың һәм бер ваҡытта ла уның һинең өсөн ниндәй байлыҡ һаҡлауын белә алмаясаҡһың.

Ҡырмыҫҡаға оҡшарға тырыш. Әгәр һинең алдыңа задание ҡуйылған икән, уға әҙерләнеп, кәрәкле материалдар туплап, эшкә тотонорға үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ ал. Ғәҙәттә, эште башлап ебәреүе генә ауыр була. Миң километрға һуҙылған сәйәхәт беренсе аҙымдан башланыуын онотма.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТУРАҺЫНДА

# ДӘҮЕР КАРТИНАЛАРЫ - "ВАТАНДАШ"ТА

**"Ватандаш" журналының май һаны тышлығының биҙәлеше менән үк иғтибарҙы үҙенә йәлеп итәсәк: 1-се һәм 4-се биттәрҙә рәссам Алексей Чернышевтың быға тиклем бик үк билдәле булмаған "Башҡорттар сәй эсә" (уңдағы һүрәт) һәм "Башҡортостан далаларында" (аҫта) картиналарынан репродукциялар урын алған.**



Ә ошо картиналар тураһында тулы мәғлүмәтте Лилия Бондаренконың "Картины времени" тигән мәҡәләһендә уҡырға мөмкин булыр. "Алексей Филиппович Чернышевты "Ырымбур крайы һәм башҡорттар тормошо рәссамы" тип билдәләйҙәр. Ул Ырымбурҙа, һалдат ғаиләһендә тыуа. Рәсем дәрестәрен ике туған ағаһы А.И.Чернышевтан һәм иконалар төшөрөүсе А.М.Ручьевтан ала. 1840 йылда В.А.Перовский бойороғо буйынса хәрби хеҙмәттән азат ителеп, Петербург художество академияһына уҡырға ебәрелә. 1841-1851 йылдарҙа академияла уҡып, "класслы рәссам" исеме ала. Аҙаҡ Ырымбурҙа йыш булып, Башҡорт Fәскәре хәрби хеҙмәткәрҙәрен, башҡорт тормошон тасуирлап күрһәткән картиналар ижад итә. А.Ф.Чернышевтың 150 этюдының һәм 20 альбомының бер өлөшө Ырымбур өлкә крайҙы өйрәнеү тарихи музейында һаҡлана, Мәскәүҙәге Дәүләт тарих музейы фондында ла уның айырым әҫәрҙәре бар. Күпселек картиналарында ғәскәри башҡорттар һынландырылған. Башҡортостан белгестәренә һәм халыҡҡа уларҙың күбеһе билдәһеҙ булып ҡала",- тип яҙа Лилия Бондаренко.



ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП

**Рауил БИКБАЕВ, Башҡортостандың халыҡ шағиры:** "Ватандаш" журналында арҙаҡлы дәүләт, фән эшмәкәрҙәре, әҙиптәр, атҡаҙанған артистар, рәссамдар менән берлектә һәләтле йәштәребеҙҙең ҡомары, ижады, күркәм эштәре тураһында ла мәғлүмәт бирелеүе хуплауға лайыҡ. Мәҫәлән, баҫмаың быйылғы 4-се һанында "Йәштәр тауышы" рубрикаһында Фәнил Бүләковтың шиғырҙары баҫылды, уларҙы уҡып, шиғриәтебеҙгә көслө өйөрмәләй, йырлы, һүтлы телле шағир килеүен аңғарырға була.

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ, филология фәндәре докторы, профессор:** Башҡортостаныбыҙҙың рухи йөҙө көҙгөһө булған "Ватандаш"та әленән әле халыҡ ижады, әҙәби мираҫ өлгөләре халҡыбыҙға еткерелеүе оло ҡыуаныс. Әйтәйек, "Урал батыр"ҙың инглиз телендә сәсмә версияһы, Айҙар Хөсәйеновтың рус телендә прозаға һалыуында "Аҡбуҙат" эпосы баҫылды. Академик Fайса Хөсәйеновтың баш һүҙе менән Шафиҡ Әминев-Тамъяни сәсәндең яңы табылған шиғырҙары (уларҙы сәсәндең бүләһе Салауат Әминев һаҡлаған) донъя күреүе үҙе бер әһәмиәтле хәл-күренеш.

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы:** "Ватандаш" журналының "Арҙаҡлы шәхестәр" рубрикаһында баҫылған очерктар, мәҡәләләр мәктәп, юғары уҡыу йорттары уҡытыусыларының, тарихсыларҙың да, халҡының мәшһүр улдары менән ҡыҙыҡһынған милләттәштәребеҙҙең дә иғтибарын йәлеп итә. Арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең эшмәкәрлеге менән замандаштарыбыҙҙы таныштырыу - беҙҙең изге бурысыбыҙ. Быға мин дә үҙ өлөшөмдө индерәм. Башҡортостан автономияһы өсөн йән аямай көрәшеүсе ижтимағи-сәйәси эшмәкәр Муллаян Халиҡов тураһындағы мәҡәләм журналдың быйылғы 4-се һанында баҫылды ла инде. Башҡорт милли хәрәкәтен әйҙәүселәр Сәғит Мерәсов, Аллабирҙе Йәғәфәров, Таһир Имаҡов, Fәлиәхмәт Айытбаев, халҡыбыҙҙың азатлығы өсөн көрәшеүсе бер туған ир-азаматтар Fабдулла һәм Хөрмәтулла Иҙелбаевтар эшмәкәрлеген, яҙмышын яктыртҡан яҙмаларым да быйыл "Ватандаш"та донъя күреп, тарихи мираҫыбыҙҙы тағы ла тулыландырыр һәм уҡытыусыларға бик тә кәрәкле ҡулланма булыр тигән уйҙамын.

---

## Ҡотлайбыҙ!



Күгәрсен районы Бикес ауылында йәшәүсе иң ҡәҙерле кешеләребеҙ - атайыбыҙ **Зиннур Абдулла улы ИШЕМҒОЛОВ** һәм әсәйебеҙ **Сәйҙә Мөхәмәтйән ҡыҙы ХӘСӘНОВАны** тыуған көндәре менән ихлас тәбрикләйбеҙ, иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ. Әсәйебеҙ 75 йәшлек юбилейын билдәләй, атайыбыҙға 78 йәш тула. Ошо көндәрҙә улар тағы ла бер иҫтәлекле байрамын ҡаршылай - ғүмер һуҡмағынан иңгә-иң терәшеп бергә атлауҙарына 53 йыл тула.

Ҡәҙерлеләребеҙ беҙҙең! Һеҙгә ниндәй генә теләктәр теләһәк тә күңелебеҙҙә булған рәхмәт һүҙҙәрен еткереп бөтә алмаҫбыҙ кеүек. Тормошто яратыуығыҙ, ғүмер ҡәҙерен белеп, матур итеп йәшәүегеҙ һоҡландыра. Үҙебеҙ Башҡортостаныбыҙҙың төрлө төбәктәрендә көн итһәк тә тыуған өйөбөҙгә һәр ваҡыт ашҡынып, һағынып ҡайтабыҙ, сөнки ҡолас йәйеп ҡаршы алыусы, тормош һынауҙарында ярҙам булырлыҡ кәңәш биреүсе Һеҙ бар! Тағы ла оҙаҡ йылдар беҙҙе ҡыуандырып, иҫән-һау йәшәргә насип итһен Һеҙгә Хоҙай.

Атай-әсәй! Яҡынлашып килгән Еңеү байрамы менән дә ҡотлайбыҙ! Бала көйөнсә генә һуғыш михнәттәрен үҙ иңегеҙҙә татып, яҡындарығыҙҙы юғалтыуҙар аша көтөп алған был Еңеүҙә һеҙҙең дә өлөш бар. Артабан да бергә-бергә шатлыҡ-ҡыуаныста йәшәргә насип булһын. Һеҙ ҡылған яҡшылыҡтар, доғаларығыҙ үҙегеҙгә изгелек, сауап булып ҡайтһын.

**Оло ихтирам һәм һөйөү менән биш ҡыҙығыҙ, кейәүҙәрегеҙ, ейән-ейәнсәрегеҙ, бүләгеҙ, килендәрегеҙ исеменән ҡыҙығыҙ Алһыу.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында

**7 майҙа** Орган залында **70-се юбилей миҙгелен ябыу** тантанаһы үтә. Еңеү көнөнә арналған концертта филармонияның алдынғы солистары, БР дәүләт академия хор капеллаһы (художество етәксеһе һәм баш дирижеры - Илдар Ишбирҙин) ҡатнаша.

**14 майҙа** Ҙур залда филармония үҙенең 70-се юбилей миҙгелен яба. **"Яңғыраһын йәшлек моңдары"** исемле концерт программаһында Миңзифа Искужина һәм Артур Туктағолов, Нәсимә һәм Азамат Тимеровтар, Лилиә Ишемйәрова һәм Урал Мортазин, Фәдис Fәниев, Сәйҙә Ильясова, Радик Вәлмөхәмәтов, Гүзәл Үлмәҫколова, Әлфиә Юлсурина, Әлим Ҡәйүмов, Рәмил Хажиев, Рәил Лоҡманов, Римма Амангилдина, Филүс Ҡалмырҙин, Индира Әсәҙуллина, Илшат Яхин, "Йәдкәр", "Далан", "Каруанһарай" төркөмдәре, БР Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры ҡатнаша.

**15 майҙа** Ҙур залда Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, сәхнә ветераны, эстраданың тәүге ҡарлуғасы **Мәғфирә Fәлиеваның** юбилей кисәһе үтә. Концертта Гүзәл Сөләймәнова, Хәсән Назар, Марат Кәримов, Артем Голов, Асия Тотманова, Рәсүл Ҡарабулатов, Артур Туктағолов, Лилиә Ишемйәрова, Вәлит Илембәтов, Ыһыйы Вәдүтова, Артур Ҡунаҡбаев, Алина Дәүләтханова, Самат Кинйәбаев, Венер Йылҡыбаев, шулай уҡ Ейәнсура ҡунаҡтары, яҡташтар ойошмаһы ҡатнаша. 17.00 - Өфөлә йәшәүсе яҡташтар менән осрашыу. 19.00 - Ҙур концерт. Инеү ирекле.



# КОЛОРАДО ҠУҢЫҘЫНАН...

## "Корадо"

**Йыл һайын баҡсасылар өсөн колорадо ҡуңыҙы менән көрәш төп проблемаларҙың береһе булып ҡала. Был ҡоротҡос менән көрәшер өсөн баҡса үҫтереүселәр араһында киң билдәле "Корадо" препараты тәҡдим итәбеҙ.**



Ул колорадо ҡуңыҙҙарын 100 процентҡа юҡҡа сығара. Препаратҡа бирешмәгән ҡуңыҙ төрҙәре юҡ.

"Корадо" препаратын һиптергәндән һуң, картуф үҫентеһендә 3-4 аҙна колорадо ҡуңыҙҙары бөтөнләй үрсемәй, шуға ла картуфты бер тапҡыр ғына эшкәртеү ҙә етә. Препараттың һыңай яғы шунда: ул картуф бүлбеләренә үтеп инмәй һәм унда йыйылмай.

"Корадо" бөтә һауа шарттарында ла яҡшы эшләй, ул йәйге эҫелә лә, ҡойма ямғырҙа ла үҙенсәлектәрен юғалтмай. 1 сутый ерҙе эшкәртеү өсөн 10 литр һыуға 1 мл препарат етә.

"Корадо" колорадо ҡуңыҙын юҡҡа сығарып ҡына ҡалмай, ә баҡсасылар өсөн яҡшы таныш булған, ағастарға, ҡыуаҡлыҡтарға һәм баҡса сәскәләренә зыян килтереүсе бетсәләрҙе лә үлтерә. Үҙ ваҡытында сифатлы итеп ағастарҙы һәм сәскәләрҙе бер тапҡыр эшкәртеү яҡшы уңыш алыу өсөн мөмкинлектәр булдыра. "Корадо"ны магазиндарҙа һәм баҙарҙарҙа һатып алырға була.

Тауар сертификация үткән.

АФАРИН!

# КЕСКӘЙҘӘРҘЕҢ...

## байрам ойошторғаны

**Йыл һайын баш ҡалабыҙҙа "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Тамыр" балалар студияһы балалар өсөн байрам үткәреп тора. Быйыл концерт "Башлаған эш - бөткән эш" исеме аҫтында үтте. Тамаша залы ул көндө балаларҙың шат тауышынан гөрләп, көләс йөҙҙәренән, нурлы күҙҙәренән балҡып торҙо.**



"Тамыр" студияһы балалары тураһында республикабыҙҙа ғына түгел, сит илдәрҙә лә беләләр хәҙер. Сығыштары иҫ китмәле матур, үҙенсәлекле уларҙың, әллә ниндәй концерттарың ары торһон. Сәхнәлә сығыш яһаған ҡурсаҡ кеүек балаларға ҡарайһың да, үҙеңде әкиәт илендә итеп хис итәһең. Кескәйҙәр яратҡан Тыр-тыр әлеге лә баяғы бер ҡатлылығы, ғәмһеҙлеге менән тамашасыларҙы көлдөрөп, сәхнәләштәрен аптыратып бөттө. Уның ҡарауы, аҡыллы, тапҡыр һүҙле балалар Тыр-тырға эш боҙоп йөрөргә һәр ваҡыттағыса форсат бирмәне, байрам дилбегәһен үҙ ҡулдарына алдылар. Әле үк ғәҙеллекте ялғандан, яҡшылыҡты насарҙан, матурлыҡты ямандан айыра белә балалар. Уларҙың тыуған телебеҙҙә шулай шартлатып, матур итеп һөйләшеүенә һәр кем һоҡланып ултырҙы.

Был юлы "Тамыр"ҙар үҙҙәренең яңы уңыштары менән дә ҡыуандырҙы. Кескәйҙәр тәү тапҡыр милли оркестрға ҡушылып, башҡорт халыҡ йырҙарын йырланы. Вокаль ансамбленең сығышы иҫ китмәле матур, үҙенсәлекле. "Тамыр" йыр студияһының кескәйҙәр төркөмө лә, сәхнәгә тәү тапҡыр сығыуҙарына ҡарамаҫтан, һис тә ҡаушап төшмәне. Күҙ генә теймәһен үҙҙәренә!

Тамаша ҡылырға килгән кескәй дуҫтарын да онотманы тамырҙар: тәнәфес ваҡытында ҡымыҙ, сәк-сәк менән һыйлап, күңелдәрен күрҙе, йырлатып, бейетеп, шиғыр һөйләтеп, бүләктәр биреп ҡыуандырҙы.

Балаларҙы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры И.Ғ. Илешев ҡотланы. "Оҙаҡламай һеҙ халҡыбыҙҙың яҙмышын үҙ ҡулығыҙға алырһығыҙ, үҙебеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе, сәнғәтебеҙҙе, телебеҙҙе һаҡларһығыҙ, бөтә илгә танытырһығыҙ, киләсәктә республикабыҙҙың ҙур кешеләре булып үҫеп етерһегеҙ, тип ышанам," - тине ул үҙенең ҡотлау һүҙендә.

**Шулай итеп...**

**"Тамыр" студияһы балаларының концертын ҡарап ултырған саҡта Зәки Вәлидиҙең халҡыбыҙҙы аҡтамыр менән сағыштырыуы иҫкә төштө. "Аҡтамырҙың бер киҫәге генә ерҙә ҡалһа, ваҡыты, уңайлы мәле етеү менән ул бар баҡсаны баҫыр", - тине ул. "Тамыр" студияһының талантлы, дәртле, аҡыллы, оҫта балаларына ҡарап ултырҙым да, уларҙы ана шул аҡтамыр менән сағыштырҙым. Киләсәктә улар ҙа тыуған ер һутында туйынып, тағы ла ныҡыраҡ тамыр ебәрер, һәр береһе тыуған иленең, халҡының лайыҡлы кешеһе булып үҫеп етер, тигән өмөт уттары күңелде йылыта.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**



### ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## МӨЙКӨЛДӘК, ҺЕРКЕЛДӘК...

"Бабай, анау һарыҡтың арҡаһы мөйкөлдәп тора, шуныһын һуйырға кәрәк...", тип әйтә торғайны әсәйем атайыма. Һимеҙ һарыҡтың һырты йыйылған майҙан һелкенеп торғанға, әсәйем уны "мөйкөлдәп тора" тигән. Ә ошо ҡылымдан яһалған исемде тәү тапҡыр билдәле йырсылар Флүрә Аллаярованың, Рәмил, Радмир, Айнур Туйсиндарҙың атаһы, Фирүзә Париждың ҡартатаһы Париж ағай Туйсиндан (был хаҡта яҙғаным да бар) ишеттем. Ишетеп кенә ҡалманым, тәү тапҡыр ҡойҡанан яһалған мөйкөлдәкте, йәғни холодецты мин уларҙа ауыҙ иттем. Ризығы ғына булһын, һүҙе табыла бит ул, ҡайһы бер яҡтарҙа мөйкөлдәкте һеркелдәк тип тә атайҙар.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Гәлсәр БАЙҒУСҠАРОВА, "Тамыр" студияһы тәрбиәләнеүсеһе:** Мин "Тамыр" студияһында өс йәшемдән алып шөғөлләнәм. Беҙҙе йырларға, бейергә өйрәткән бөтә апайҙарҙы ла шул тиклем яратам. Улар изге күңеллеләр, йомарттар, беҙҙе бик яраталар. "Тамыр"ҙа минең дуҫтарым да күп, улар менән бергә йырлауы, бейеүе оҡшай. Был байрамды йыл һайын бергә уҙғарабыҙ. Беҙ байрамға оҙаҡ, ныҡлы әҙерләндек. Үҙем бейергә, йырларға, пианинола уйнарға яратам. Пианинола уйнарға уҡытыусым Ләйлә Батыр ҡыҙы өйрәтте. Был тамашаға әсәйемдәр ҙә килде. Улар минең өсөн һәр саҡ ҡыуана. Бөтә кешеләр ҙә ҡайғырмай, гел йырлап, бейеп, көлөп йөрөһөн ине, тип теләйем.

**Гөлназ МӨХӘМӘТШИНА, "Тамыр" студияһы тәрбиәләнеүсеһе:** Мин әлеге ваҡытта Мостай Кәрим исемендәге 158-се мәктәптә белем алам. "Тамыр" студияһына йөрөнөм, хәҙер "ҙурайғас" беҙҙе ҡунаҡҡа ғына саҡыралар, ошондай байрамдарға килеп, кескәйҙәр менән сығыш яһап китәбеҙ. Бәләкәй балаларҙың шулай йырлап, бейеүҙәрен күреп, ниндәй матур быуын үҫеп килә, тип ҡыуанам. Беҙ "Тамыр"ҙа шөғөлләнгәндә әлеге уртансы төркөм балалары бәләкәй генә ине. Хәҙер ҡалай үҫеп киткәндәр, ҡыйыуланғандар, оҫтарғандар. Үҙем ҙурайғас, йырсы булырға хыялланам. Миндә был хыял "Тамыр" студияһында шөғөлләнгән саҡта уҡ тыуғайны. Үҙемдең уҡытыусым Исламова Сәлимә Барый ҡыҙына ҙур рәхмәтлемен. Ул мине "Тамыр" студияһына ҡабул итте. Күп нәмәгә өйрәтте, миндә тырышлыҡ, ныҡышмалыҡ кеүек яҡшы сифаттарҙы үҫтерҙе. "Тамыр"ҙағы ағай-апайҙарҙы, дуҫтарымды шул тиклем һағынам, мин уларға ҙур рәхмәтлемен.

### АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҒАИЛӘ БӘХЕТЕНӘ...

## һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә

Аҡсаһы аҙ булып та күңел күтәренкелегендә йәшәгән кеше - бәхетле, аҡсаһы күп булып та йән тыныслығы тапмағандар - бәхетһеҙ.

**(Демокрит).**

Тәбиғәттән бөрәү ҙә түбән йә бейек булмай, бары тик хеҙмәте генә кешене түбән йә бейек итә.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Ахмаҡтың тормошо ҡурҡыу менән тулы, сөнки ул бер эшен дә бөгөн эшләмәй, ә барыһын да иртәгәгә ҡалдыра.

**(Кесе Сенека).**

Әгәр ҙә бәхет йорто төҙәргә тура килһә, ундағы иң ҙур бүлмәне көтөү өсөн тәғәйенләргә тура килер ине.

**(Ж. Ренар).**

Ғаилә бәхетенә һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә ала, тип әйткән кеше бик аҡыллы булғандыр.

**(М. Монтень).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Әнәс исемле кеше үткер телле һәм шаян булыуы менән тирә-яҡта дан алған. Күптәр уның шаянлығына шаянлыҡ менән яуап биреп йә көтөлмәгән һорау биреп, уның иғтибарын яуларға тырышҡан. Аҡылға һайыраҡ һәм тәрбиәһеҙ бер егет Әнәсте аптыратмаҡсы була һәм уға: "Хөрмәтле Әнәс ағай, әйт әле, һин ҡасаныраҡ был донъяны ташлап китәсәкһең?"- тип һорай. "Ә ниңә һиңә минең үлеүем кәрәк?" - ти Әнәс. "Күптән түгел атайым беҙҙе ташлап, теге донъяға күсте, - ти егет. - Мин уға хат яҙҙым, хатымда һеҙгә, шуҡлығы менән танылған Әнәс ағайға әлеге һорауҙы биреүем тураһында ла белгерттем. Бер рәхәтләнеп көлөп алһын әйҙә. Тик был хатты атайыма нисек тә еткерергә кәрәк бит инде. Хатты уға һеҙ алып барып еткерә алмаҫһығыҙмы икән, тигәйнем". "Һиңә ярҙам итергә бик теләр инем дә ул, - ти Әнәс. - Ләкин һиңә атайыңа хат илтер өсөн икенсе кешене ялларға тура килер. Сөнки мин бик гонаһлымын һәм Хоҙай Тәғәлә мине туп-тура тамуҡҡа ебәрәсәк. Ә бына һинең кеүек "үткер телле" улды тыуҙырған һәм тәрбиәләгән атайыңды Хоҙай, моғайын, ожмахҡа ебәргәндер, сөнки ул бит һинең ҡылыҡтарыңа оҙаҡ ваҡыт түҙемлек күрһәткән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

E-mail: kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6173
Заказ 1735